ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 декабрь - ғинуар (аҡъюлай - һыуығай) 2019

№52 (886)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгеле тамамланды. "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 ғинуарға тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе февралдән алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" биш айға 563 һумға төшәсәк. Бергә булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Шәжәрәләребеҙҙе өйрәнәйек! 3



Ауыл байҙары күберәк булһын! 6



Мөғжизәләр тыуҙырыуға



һәләтле халыҡ булып ҡалайыҡ! 8-9,11

Үҙебеҙсә йыһазлайыҡ! 13



ТВ-программа 14

ӘЙҘӘГЕҘ...

## РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Байрамдар төрлө-төрлө беҙҙә: ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы һәм ир-егеттәрҙеке, уҡытыусыларҙыҡы һәм табиптарҙыҡы, башҡа һөнәр эйәләренеке, ниндәйҙер халыҡ хужалығы тармағына, тарихи ваҡиғаларға арналғаны... Ә бына Яңы йыл - йәшенә, ҡартына, ниндәй һөнәр эйәһе булыуына, ниндәй вазифа биләүенә ҡарамай, барлыҡ кешеләрҙең уртаҡ байрамы. Уртаҡ байрамыбыҙ, күркәм байрамыбыҙ ҡотло булһын, тип өндәшәбеҙ шуға бар кешеләргә.**

Ҡотлауҙарыбыҙҙы бигерәк тә ун ете йыл буйы "Киске Өфө"нән айырылмаған, шулай уҡ ошо йылдар дауамында гәзитебеҙҙе үҙенең иң тоғро дуҫтары исемлегенә индергән уҡыусыларыбыҙға юллайбыҙ. Улар халыҡ аҡылының, ғәмде, сәмде, рухты уятыр бәҫле һүҙҙең баһаһын белгән аңлы заттар. Изге теләктәребеҙҙе баҫмабыҙҙы үҙенең һиммәтле уй-фекерҙәре майҙанына әйләндергән авторҙарыбыҙға ла юллайбыҙ. Ижади фиҙаҡәрлегебеҙ уҡыусыларыбыҙ, авторҙарыбыҙ менән бәйләнешебеҙҙе өҙмәүгә, уларҙың рухи һүҙгә танһығын ҡандырыуға, мең төрлө һорауҙарына, ихтыяждарына яуап биреүгә йүнәлдерелгән. Һәр хәлдә, ике яҡлы бәйләнеш булдырылған, "Киске Өфө" күптәр өсөн "өҫтәл гәзите"нә әйләнгән, тигән уйҙабыҙ. Сөнки ил-йорттан матур хәбәрҙәр ишетеп торабыҙ, хаттар алабыҙ, телефон бәйләнешебеҙ ҙә бик әүҙем эшләй.

Һүҙҙе ҡеүәтләгән бер миҫал. Мәхмүзә Исламғолова тигән иң әүҙем, иң тоғро уҡыусыбыҙҙың береһе Баймаҡ районы Ярат ауылында йәшәй, "Киске Өфө"нө баҫылып сыға башлағандан (2002) алдырып уҡый. Үҙе генә алдырып ҡалмай, баҫмабыҙҙы ауылдаштары араһында ла таратыуға, ҡыҙыҡһындырыуға күп көс һалыуын, төрлө осрашыуҙар, фекер алышыуҙар ойоштороуын да ишетеп торабыҙ. Күптән түгел генә уның тураһында Ярат ауылы ағинәйе Гүзәл Монасипова ошоларҙы һөйләгәйне: "Мәхмүзә апайҙы бер ауылдашы ҡунаҡҡа саҡыра икән. "Барам, әгәр "Аҡбуҙат" журналына һәм "Киске Өфө" гәзитенә яҙылһаң", - тигән шарт ҡуйған Мәхмүзә апай. "Күптән яҙылып ҡуйҙым бит инде", - тигән яуап ишеткәс, Мәхмүзә апай тағы: "Берәй балалы ғаиләгә "Аҡбуҙат" журналы яҙҙыр, берәй мохтаж булған пенсионерға "Киске Өфө" яҙҙыр, шунһыҙ һиңә ҡунаҡҡа бармайым", - тип ныҡыша икән. Ҡунаҡҡа саҡырыусы ни хәл итһен, ризалашҡан. Ауылдың иң арҙаҡлы ағинәйен мәжлесенән мәхрүм итә алмай бит инде..." Бына шундай кеше инде ул Мәхмүзә апай. Оло рәхмәтебеҙ яуһын уға!

(Дауамы 3-сө биттә).

ӘЙТКӘНДӘЙ...

## ӨФӨБӨҘҘӘ - БАЙРАМ!

- **Яңы йыл** байрамдары Өфөлә **20 декабрҙә** "Башҡортостан" дәүләт концерт залында республика балаларының Яңы йыл шыршыһы сараларынан башланып китте. Унда барлығы 780 бала ҡатнашты. **28 декабрҙә** иһә баш ҡалала Ҡыш бабайҙар парады ойошторолдо.
- **Яңы йыл** төнөндә Өфөнөң шыршы ҡуйылған бар майҙансыҡтарында театрлаштырылған тамашалар ойошторола. Йола буйынса байрам салюты Ленин исемендәге майҙанда аттырыласаҡ.
- **Яңы йыл** төнөндә Өфөлә Ҡунаҡһарай алдындағы майҙанда (Ленин урамы яғынан) Башҡортостандың һәм Татарстандың популяр башҡарыусыһы Радик Юлъяҡшиндың концерты була.
- **3 ғинуарҙа** Өфөлә тәүге тапҡыр Ҡарһылыуҙар парады була. Сара "TERRA ZIMA" яңы йыл фестивале барышында ойошторола. Ҡыш бабайҙың ейәнсәре кейемендә теләгән һәр кем килергә мөмкин. Көндөҙгө сәғәт 2-гә Совет майҙанына йыйылырға кәрәк.

ӘЙҘӘГЕҘ...



## ҠАРҺЫЛЫУЫБЫҘҘЫ...

### башҡортса кейендерәйек!

**Күп йылдар инде боронғо башҡорт кейемен тергеҙеү менән шөғөлләнәм. 3D-принтер ҡулланып, биҙәүестәрҙе үҙем дә эшләйем. Яңы йыл алдынан башҡорт Ҡыш бабайына, башҡорт Ҡарһылыуына милли кейемдәр ижад итергә кәрәк, тигән уй төштө башыма. Һәм халыҡ араһында таныллыу яуларлыҡ, үҙенсәлекле костюм тегеүҙе маҡсат итеп эшкә тотондом.**

(Дауамы 5-се биттә).

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Яңы йыл көндәрендә ғаилә байрамдарын нисек ойошторағыҙ?



***Зиннур БОҪҠОНОВ, Бөрйән районы Әбделмәмбәт мәктәбенең физкультура уҡытыусыһы, тренер, фоторәссам:*** Әбделмәмбәт ауыл хакимиәте биләмәһенең үҙәге булған беҙҙең ауыл һуңғы йылдарҙа үҫә, матурлана, йәш ғаиләләр арта. Ауыл халҡы беҙҙә күптән инде сәләмәт тормош рәүешен һайлаған. Быға күп йәһәттән әүҙем спорт һәм мәҙәниәт менән дуҫлыҡ булышлыҡ итә, тип уйлайым. Әбделмәмбәт урта мәктәбенең районда һәм республикала ғына түгел, унан ситтә лә физик культура һәм спорт буйынса иң яҡшы мәктәптәр иҫәбендә булыуы хаҡында ғорурлыҡ менән оҙаҡ һөйләргә булыр ине. Шуныһы мөһим: мәктәптең спорт залы, майҙансыҡтары һәм ҡорамалдары унда белем алыусы балалар өсөн генә түгел, бында ауылыбыҙҙың спорт һөйөүсе йәштәре лә, өлкәнерәктәр ҙә ихлас шөғөлләнә. Бер һүҙ менән әйткәндә, ауылда физик культура һәм спорт культы өҫтөнлөк итә. Шуға күрә лә оҙайлы ялдар, каникулдар, байрамдар мәле минең өсөн фәҡәт күмәк спорт саралары менән күҙ алдына баҫа. Яңы йыл байрамдары бигерәк тә, сөнки был осор спорт саралары, ярыштар ябыҡ залдарҙа ғына түгел, ә боҙҙа, хоккей майҙанында, саңғы юлдарында ла барасаҡ. Байрам тип, "ҡырын тейәп", тауыш күтәреп, тәртип боҙоп йөрөүселәргә беҙҙә урын юҡ.

Һеҙҙең һорауға килгәндә, ғаиләләр араһында спорт ярыштары күптән планлаштырып ҡуйылған инде, ул ғинуар ялдарының тәүге аҙнаһында уҡ башланасаҡ: бер өлөшө боҙҙа булһа, икенсе өлөшө саңғы трассаһында барасаҡ, тип хәл ителгән. Әбделмәмбәттәр, ғөмүмән, саңғысы халыҡ, трасса бер ҡасан да буш тормай. Ярыш иғлан итеүең генә көс: беҙҙең ауылдан ғына 50-60-лап төрлө йәштәге саңғысы стартҡа баҫа. Оҙайлы яңы йыл ялдарында ла һәм, ғөмүмән, башҡа ваҡыттарҙа ла спорт залы ла һәр саҡ тулы: расписание буйынса бында волейбол, фитнес, грэпплинг, пауэрлифтинг, йәйәнән уҡ атыу буйынса күнекмәләр үтә. Өҫтәл теннисы менән дә яратып шөғөлләнә һәүәҫкәр спортсыларыбыҙ. Тотош ғаиләләре менән күнекмәләргә, ярыштарға йөрөүселәр ҙә бар. Әйткәндәй, Яңы йылды ҡаршылағас, ауыл егеттәре һәм ҡыҙҙары араһында өҫтәл теннисы буйынса ярыш үткәреләсәк, был хәҙер үҙенә күрә һәйбәт йолаға әүерелде инде. Әйтеүемсә, мәктәптең боҙ майҙансығы ла иртәнән алып кискә тиклем буш булмаясаҡ. Йылдағыса, хоккей турниры планлаштырылған, мәктәп уҡыусылары, ялға ҡайтҡан студенттар һәм ауыл егеттәре командалары көс һынашасаҡ. Кемдәрҙеңдер спорт залдары, майҙансыҡтар ял иткән ваҡытта беҙҙеке ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтә. Бай һәм йөкмәткеле буласаҡ яңы йылдың оҙайлы байрам көндәре. Саңғы юлына бергәләшеп сыҡҡан ғаиләләр, әйтеүемсә, һирәк күренеш түгел беҙҙә. Шәхсән үҙебеҙҙең ғаиләлә лә саңғы спортын бик яратабыҙ. Яйы сыҡҡанда ҡыҙым Алинаның да спорт уңыштары хаҡында әйтеп китәйем: гер күтәреү буйынса ул ҡыҙҙар араһында Башҡортостан чемпионы, ике тапҡыр Рәсәй беренселеге призеры; шулай уҡ йәйге полиатлон буйынса республика беренселеге призеры.

Мәғлүм булыуынса, үткән йәй Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров беҙҙең мәктәптә булып китте. Ул беҙҙә әллә ни ҙур булмаһа ла спорт комплексы төҙөү кәрәклеген билдәләне һәм был мәсьәлә буйынса ныҡлап шөғөлләнергә, аныҡ тәҡдимдәр индерергә ҡушты. Ошо ниәт бойомға ашырылһа, унда мәктәп уҡыусыларынан тыш, ауыл халҡын, ғаиләләрҙе лә сәләмәт тормошҡа йәлеп итеү өсөн яңы мөмкинлектәр тыуыр ине.

***Тәнзилә ҠУНАФИНА, мәғариф ветераны, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы:*** Яңы йылды һәр саҡ ейән-ейәнсәрҙәребеҙ менән ҡаршылайбыҙ. Декабрь аҙағына ҡарай дүрт ейәнсәрем менән биш ейәнемә Ҡыш бабай күстәнәстәре эшләп таратам. Ә йылдың иң һуңғы көнөндә балалар үҙҙәре беҙгә, төп йортҡа килеп, ҡотлап, бүләктәр биреп китәләр, килә алмағандары күстәнәс йә аҡса ебәрә. Ә инде кискә табан йола буйынса мунса инеп сығабыҙ ҙа ябай ғына итеп үҙебеҙ ятаҡҡан ризыҡтарҙан байрам табыны әҙерләйбеҙ. Сәғәт уҡтары ун ике яғына китһә, өҫтәл артына ултырабыҙ. Изге теләктәребеҙҙе әйтешеп, бүләктәребеҙҙе бер-беребеҙгә тапшырабыҙ. Сәғәт ун икене һуҡҡас, урамға салют аттырырға йүгерәбеҙ, үҙебеҙҙеке бөтһә, башҡаларҙыҡын ҡарайбыҙ. Өйгә инеп йылынабыҙ ҙа машина менән Асҡарға елдерәбеҙ. Ундағы шыршыны ҡарайбыҙ, шунын янындағы тауҙа ейәнсәрҙәребеҙ рәхәтләнеп һырғалаҡ шыуа. Башҡа балаларыбыҙ ҙа шунда килеп етә. Бөтә ейән-ейәнсәрҙәр шунда осрашып, шау-гөр килеп тау шыуалар. Сәғәт икелә район хакимиәте салют аттыра, бик матур күренеште тамаша ҡылабыҙ. Шунан һуң инде өйҙәребеҙгә таралышабыҙ. Бына шулай үтә беҙҙең ғаилә байрамдары. Өлкәнәйелде инде тип, өйҙә генә тик ятып булмай. Күҙебеҙгә ҡарап торған ейәнсәрҙәргә байрам яһарға, хәлдән килгәнсә Яңы йыл мөғжизәләре тыуҙырырға тырышабыҙ. Әйтеүемсә, әсәләре ҡырҙа аҡса эшләй, ейәнсәрҙәрҙе беҙ ҡарап торабыҙ, шуға ла олаталары менән бергәләп, шартына килтереп, улар өсөн байрам үткәрәбеҙ. Бер яҡтан, шуныһы ла шәп: бер ҙә генә лә беҙгә ҡартайырға ирек бирмәйҙәр. Ә инде ҡышҡы каникул көндәрендә олаталары менән саңғыла урманға сығып китәләр. Ҡар өҫтөндә сыбарланып ятҡан йәнлек, ҡош-ҡорт эҙҙәрен өйрәнәләр. Урманға сыҡмаған көндәрҙә боҙҙа конькиҙа шыуалар. Олаталары балаларҙың теләктәрен ихлас тыңлай, төрлө һорауҙарына яуаптар бирә, шулай итеп уларға тормош һабаҡтары күндерә.

***Гөлнара ФӘЙЗУЛЛИНА, күп балалы әсә, Сибай ҡалаһы:*** Яңы йыл - ғаилә байрамы, был көндө, тәбиғи, һәр кем үҙ йортонда яҡындары менән ҡаршыларға теләй. Беҙҙең ғаилә лә, айырыуса балаларыбыҙ, был көндө һәм айырыуса ҡышҡы каникулдарҙы түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ. Ике улыбыҙ ҙа мәктәп уҡыусылары, өлкәне - бишенселә, уға етәгеһе икенсе класта уҡыйҙар, ҡыҙыбыҙға биш йәш, балалар баҡсаһына йөрөй. Үҙем шунда уҡ тәрбиәсе булып эшләйем, ә ирем Сибай-Баймаҡ ҡала-ара маршрутында автобус йөрөтә. Уның эше бик тынғыһыҙ, эштән һуң ғына ҡайтып инә, шуға күрә ғаилә ялдарын ойоштороу минең елкәгә төшә. Бының миңә бер ҡыйынлығы ла юҡ, сөнки эшем дә шул уҡ балалар тәрбиәһе, улар менән төрлө уйындар, ярыштар, башҡа төрлө ҡыҙыҡлы саралар ойоштороу менән бәйле. Яңы йыл байрамын улдарым - мәктәптә, беҙ ҡыҙым менән баҡсала үткәреп ҡайтабыҙ ҙа, өйҙә 31 декабрь ысын Яңы йылды ҡаршыларға әҙерләнә башлайбыҙ. Иң яратҡан эшебеҙ - шыршы биҙәү. Уйынсыҡтарҙың элек һатып алынғандары бик әҙ, күбеһен балалар менән бергәләп үҙебеҙ эшләйбеҙ, шулай ҡыҙығыраҡ та, күңеллерәк тә. Ә бына шыршы тигәнебеҙ, әлбиттә, магазиндан һатып алынған яһалма шыршы. Урмандан килтерәләрме, һатыр өсөн махсус плантацияла үҫтерәләрме - тере шыршылар беҙгә бик йәл. Байрам үткәс, уйынсыҡтарын һыпырып алып, уларҙы арҡыс-торҡос сығарып ташлағандарын күреп, ҡыҙымдың илауын әле булһа онота алмайым, шуға беҙ тере шыршыларҙы тәләфләмәү яғындабыҙ. Хуш еҫе таралһын өсөн ботаҡтарын ғына элеп ҡуям.

Өйҙә тәмлекәстәр менән тулы табын тирәләй Яңы йылды ҡаршылағас, бергәләшеп ҡала шыршыһы ҡуйылған майҙанға сығабыҙ. Балалар тау шыуа, төрлө уйындар, конкурстарҙа ҡатнашабыҙ, улдарыбыҙ бүләктәр алып ҡыуана. Иремә эшенән бер нисә көн ял тәтеһә, шуны ғына көтөп торған ғаиләм менән ауылға, өләсәй янына ысҡынабыҙ. Бына унда, исмаһам, ысын тәбиғәт ҡосағында - ял! Балаларҙы урамдан индереп булмай: сана, саңғы шыуалар, аталары менән йылға буйына төшөп, мәке уйып, балыҡ ҡармаҡлайҙар... Һәм, әлбиттә, өләсәйгә йорт-хужалыҡ эштәрендә бергәләшеп ярҙам да итәләр: ҡар көрәйҙәр, мал һарайын таҙарталар, һыйыр, һарыҡтарға бесән һалалар, өй соланына яҡынайтып ярылған утынды ташып ҡуялар... Бер нисә көн эсендә балаларым күҙгә күренеп теремекләнә, ашауҙары яҡшыра, йөҙҙәренә алһыулыҡ йүгерә. Беребеҙҙең дә ауылдан кире ҡалаға ҡайтып киткеһе килмәй, ләкин ни хәл итәһең - ауылыбыҙ төпкөлдә ята, бәләкәй, мәктәп юҡ, газ килеп етмәгән, утын яғалар. Тағы шуныһы: бында бер-ике кеше көмөшкә ҡайнатып һатып ята. Улар өйөнән көнө-төнө кеше өҙөлмәй. Эсә ауылдаштар...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шағир, сәйәси эшмәкәр Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыуҙы билдәләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Юбилей саралары 2020 йылда уҙғарыла, тип хәбәр иттеләр республика Башлығының матбуғат хеҙмәтенән.

✓"Медиалогия" компанияһы Рәсәйҙең билдәле шәхестәре рейтингын әҙерләне. Рейтингта беренсе урынды Рәсәй президенты Владимир Путин биләй. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров исемлектә 14-се урында тора. Бынан алда Радий Хәбиров "Медиалогия" компанияһының губернаторҙар рейтингында өсөнсө урынды алды.

✓Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тейешле закон проектын ҡабул итте. Документҡа ярашлы, Башҡортостан биләмәһендә күрһәтелгән социаль хеҙмәттәр исемлеге ауыл ерендә йәшәгән 65 йәштән өлкәндәрҙе медицина ойошмаларына йөрөтөү хеҙмәте менән тулыландырылды. Республика Хөкүмәте учреждениелар исемлеген раҫланы.

✓Билдәле булыуынса, Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәтендә һәм Башҡортостан республикаһы хөкүмәтендә корпоративтар булмай. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров чиновниктарҙы яңы йыл корпоративтарын үткәргәндә урталыҡты һаҡларға саҡырҙы: "Ҡотлауға ҡаршы түгелмен. Коллективығыҙға рәхмәт әйтегеҙ - йыл бик бай булды, байтаҡ эштәр башҡарылды. Йомғаҡ яһарға кәрәк, әлбиттә, ләкин ябай ғына итеп", тине республика етәксеһе.

✓31 декабрҙә республиканың барлыҡ почта бүлексәләре билдәләнгән графикка ярашлы эшләй, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. 2020 йылдың 1,2 һәм 7 ғинуары республиканың почта элемтәһе бүлексәләре өсөн ял булып тора. Шул уҡ ваҡытта пенсияларҙы һәм пособиеларҙы, почта аша ебәрелгән әйберҙәрҙе, гәзит-журналдарҙы ваҡытында таратыу өсөн ауылда ҡайһы бер почта бүлексәләренә икенсе эш режимы булдырылыуы мөмкин.

✓Башҡортостанда быйыл ике йөҙҙән ашыу ғаиләгә шәхси йортҡа газ үткәреү өсөн сертификаттар тапшырыла, тип хәбәр итә республиканың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты. Тәүге 284 ғаилә ошо сертификаттарҙы быйыл уҡ, ғариза биргән урынға ҡарап, Республика халыҡҡа социаль ярҙам филиалдарында һәм күп функциялы үҙәк бүлексәләрендә алырға мөмкин.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ШӘЖӘРӘЛӘРЕБЕҘҘЕ ӨЙРӘНӘЙЕК!



**Күптән түгел Татарстанда йәшәгәненә рок-йырсы һәм йәмәғәт эшмәкәре булараҡ билдәле булған Альберт Исмаил үҙенең милли асылына ҡайтты - ата-бабаларының башҡорт булғанлығы тарихи документтарҙа теркәлгәнен асыҡлағас, башҡорт булыуҙы хуп күрҙе.**

"Беҙ тыумыштан бирле үҙебеҙҙе татар итеп һананыҡ. Татар булып үҫтек. Ике яҡтан да башҡорт булып сыҡтым. Бер ниндәй ҙә борсолоу булманы, һөйөнөү булды. Үҙем өсөн кем булғанымды иҫбатланым. Ошо мәғлүмәт кешегә көс бирә. Ул миҙгелдә һин яңғыҙ түгел, ҙу-у-р бер башҡорт тигән донъяның ағзаһы булаһың. Яуаплылыҡ та тыуҙы. Үҙҙәрен татар тип иҫәпләп йөрөгән яҡташтарыма шәжәрәләрен тәҙөргә ярҙам итәм, йүнәлеш бирәм", - тине Альберт БСТ-лағы сығышында. Уның атаһы буйынса нәҫел-нәсәбе - Шаран районының элекке Сыуаш-Тамъян ауылы башҡорттары (йылан, тамъян), әсәһе - шул уҡ районДың Күгәрсен-Бүләк ауылынан (ҡырғыҙ, юрмый).

Уның был белдереүен ҡайһы берәүҙәр үтә насар ҡабул итте, уға төрлө ярлыҡтар тағыуҙан да һис тартынманылар. Әммә ошо ир-уҙаман көслө рухлы булып сыҡты, ул быны аҡыл менән, төптән уйлап эшләнгән ғәмәл итеп аңлата алды. Әлбиттә, этник берҙәйлегенде (ғилми телдә - идентичность) таныу - һәр кемдең шәхси үҙбилдәләнешенән тора, әммә бында үҙ шәжәрәңде, нәҫел һәм ырыу тарихын белеү ҙә бик мөһимдер. Әйткәндәй, үҙенең ысын этник асылына ҡайтыусы бер Альберт Исмаил ғына түгел. Башҡорт тарихы буйынса үтә ҡыҙыҡлы китаптар яҙыусы Йәдкәр Бәширов та шулай ти бит: "Бар аңлы ғүмерем буйына үҙемде татар сығышлы, тип иҫәпләнем. Әммә шәжәрә икенсене һөйләй - башҡорт нәҫеленән мин, үҙемдең башҡорт икәнлегемә һис шикләнмәйем".

Әйтергә кәрәк, башҡортлоғон яңы осорҙа ҡабатлап таныусы төньяҡ-көнбайыш башҡорттары күп ул, тик улар был хаҡта артыҡ һөйләп бармай. Ғөмүмән, совет осоронда йәҙәр менләгән аҫаба башҡорт үҙенең боронғо менталитетынан ситләтелде, был башлыса сәйәси сәбәптәр менән бәйле ине.

**1897 йылда уҙғарылған Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу материалдары менән танышһаң, ҡараңғы төн яҡтырып киткәндәй тойола миңә. Беҙҙең өсөн бына нимә иғтибарға лайыҡ: ошо ваҡыттағы иҫәп алыуҙа кешенең милләтен түгел, туған телен теркәйҙәр. Рәсәй империяһында йәшәгән 1 321 363 кеше үҙенең туған теле сифатында башҡорт телен күрһәтә.**

Хәҙер сәйәси шауҡымдан шаңҡыған ҡайһы бер ғалим ишараттары һәм башҡорт дәүләтселеген кәмһетеп-түбәнһетеп ҡараусылар Өфө губернаһында башҡорттар бик аҙ булған да, ул тик большевиктар ихтыяры менән генә Башҡорт автономияһы республикаһына ҡушылған, тип сафсата һата. 1897 йылғы иҫәп алыу материалдары бының киреһен һөйләй бит!

**Халыҡ иҫәбен алғанда Өфө губернаһында теркәлгән 2 196 642 кешенән 899 910 заттың (40,96 проценты) туған теле итеп башҡорт теле күрһәтелә.**

Әллә тағы империя переписчиктары Өфө губернаһы татарҙарына башҡорт телен көсләп таҡтымы икән? Юҡ инде, был яңы әкиәт иҫке заманға һис тура килмәй.

**Өфө губернаһында XIX быуат аҙағында йәшәгән башҡорт/татар нисбәтен үҙегеҙ сағыштырып ҡарағыҙ: Өфө өйәҙендә башҡорт телләләр - 114 493 (30,7 процент), татар телләләр - 4 523 (1,2 процент), Бәләбәй өйәҙендә ошондай нисбәт - 232 960 (53,8 процент) - 48 784 (11,3 процент), Бөрө өйәҙендә - 262 264 (52,7 процент) - 2 339 (0,5 процент), Златоуст өйәҙендә - 51 345 (27,7) - 1953 (1,0), Стәрлетамаҡ өйәҙендә - 115 796 (35,4) - 20 193 (6,2), Минзәлә өйәҙендә - 123 052 (32,4) - 107 025 (28,2 процент). Иҫ киткес һандар - шул уҡ Минзәләне генә алып ҡараһаң да - бына ҡасан башҡорт берҙәйлеге сәскә атҡан үҙенсәлекле диалекты булған төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ерҙәрендә!**

Бөгөн Татарстандың Дамир Исхаҡов кеүек ҡайһы бер ғалимдары ошо тарихи фактты һис танырға теләмәй: йәнәһе, ул замандарҙа башҡорт этнос исеме түгел, ә ни барыһы сословие атамаһы булған. Быны күҙгә ҡарап алдау, тип әйтергә генә ҡала. Ысын тарихсы өсөн документаль сығанаҡтар кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдер ул. Әлеге 1897 йылғы Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу документтарында барса сословиелар ҙа һаналып, ошо сословиеға ҡараған кешеләр һаны ла билдәләнгән. Бына улар: дворяндар, чиновниктар, руханиҙар, почетлы граждандар, сауҙагәрҙәр, мещандар, крәҫтиәндәр, ғәскәри казактар, инородецтар, сит ил подданныйҙары. Күрәһегеҙ, сословиелар исемлегендә башҡорттар юҡ!

Тарих ҡабатланмай, әммә юғалтҡан милли үҙаңын кире ҡайтара ала кеше, сөнки төркиҙәрҙә нәҫелнәсәбеңдең кем һәм ҡайҙан булыуын белеү - йәмғиәт ҡануны. Әйҙәгеҙ, ҡан-ҡәрҙәштәр, шәжәрәләребеҙҙе тергеҙеп, асылыбыҙҙы өр-яңынан асайыҡ!

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**(Башы 1-се биттә).**

Изге теләктәребеҙгә, беҙҙең иң оло рәхмәт һүҙенә лайыҡлы авторҙарыбыҙ араһынан гәзитебеҙҙең тәүге һанынан башлап яҙышҡан Фәүзиә апай Усманованы (Яхина тип баҫыла) телгә алып китке килә. Шул тиклем һиммәтле һәм ҡиммәтле фекерҙәре менән уртаҡлаша бит һөнәре буйынса рәссам-скульптор апайыбыҙ. Ун ете йыл буйы гәзитебеҙҙә баҫылған фекерҙәре күптән түгел дуҫтары ярҙамы менән ике китап булып баҫылып сыҡты. Ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙға уларҙы беҙ бүләк итеп юллаһыҡ та инде.

Тағы бер беҙҙең һәм уҡыусыларыбыҙҙың тәрән ихтирамына лайыҡ авторыбыҙ тураһында әйтеп китмәү мөмкин түгел. Хәлил Һөйөндөков ул. Сибай ҡалаһында йәшәй. Уның мәҡәләләрен беҙ һәр һанда тиерлек уҡыйһығыҙ. Отставкалағы хәрби табип булараҡ, ул йә армия тормошондағы мөнәсәбәттәрҙе һүрәтләй, буласаҡ һалдаттарға кәңәштәр бирә, йә һаулыҡ һаҡлау серҙәре менән уртаҡлаша, йә милли һәм дини тәрбиә ысулдары тураһында фекерҙәрен еткерә.

Шулай итеп, беҙҙең "Киске Өфө" гәзите ҡарамағында баҫмабыҙға матур йөкмәтке өҫтәгән, тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе менән уртаҡлашҡан, аҫыл һүҙе, алтын фекере менән күтәрмәләгән бик тә эшлекле, зыялы, мәртәбәле авторҙар коллективы тупланған. Уҡыусыларыбыҙҙың ихтыяжына яуап бирә, уларҙың беҙгә тоғрологон тәьмин итә улар. Яңы йыл менән ҡотлап, бәхетле булығыҙ, Хоҙай фатихаһында йәшәгеҙ, тип теләге килә барығыҙға ла. Хоҙай фатихаһында йәшәү нисек була икәне тураһында уйланып бармайбыҙ, әлбиттә. Тағы бер тапҡыр күҙҙән үткәрәйек әле ошо хәҡиҡәтте:

- Әгәр ҙә һинең һыуытҡысыңда - аҙыҡ, өҫтөңдә кейем, баш осоңда ҡыйығың бар икән - тимәк, һин Ер йөҙөндә йәшәүсе 75 процент халыҡтан байыраҡһың һәм һин Хоҙай фатихаһындаһың...

- Әгәр ҙә һин иртән йоҡонан торғанда үҙеңде һау-сәләмәт кеше итеп тояһың, үҙ аяҡтарыңда атлап, күҙҙәрең менән яҡты донъяға бағаһың икән - тимәк, һин аяҡһыҙ-күҙһеҙҙәрҙән, бөгөнгә ҡәҙәре йәшәмәгәндәрҙән бәхетлерәкһең.

- Әгәр ҙә һин бер ваҡытта ла яу ҡурҡынысы, төрмә ҡараңғылығы, аслыҡ ғазаптары татымағанның икән - тимәк, һин Ер йөҙөндәге 700 миллион кешенән бәхетлерәкһең һәм Хоҙай хозурындаһың.

- Әгәр ҙә һин киң йылмайып, башыңды күтәреп йөрөй һәм әйләнә-тирәләге кешеләргә үҙеңдең һөйөүеңде еткерә алаһың икән, тимәк, һин гел икеләнеп һәм бер сиктән икенсеһенә һуғылып, донъянан йәм тапмай йәшәгән кешеләрҙән юғарыраҡ тораһың - был да Хоҙай фатихаһы...

Әйҙәгеҙ, шөкөр итәйек, үҙебеҙҙә булған ошо байлыҡтар өсөн Хоҙайға, атай-әсәйебеҙгә, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға рәхмәт уҡыйыҡ. Күңелдәрегеҙгә - рух, ҡот, тәнегеҙгә - ныҡлы сәләмәтлек, иждаҡ ҡомары насип итһен.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика йортонда уҙған "Төҙәлеш сәғәте" кәңәшмәһендә Белорет районындағы "Морат" ғаилә курортын үҫтереү концепцияһын ҡараныҡлар. Инвесторҙар хәҙерге тау саңғыһы үҙәге биләмәһендә Рәсәйҙә йылына 500 меңгә тиклем туристы ҡабул итергә һәләтле федераль кимәлдәге йыл әйләнәһенә эшләгән ғаилә курорттарының береһен төҙөргә ниәтләй. Республика етәксеһе Башҡортостан Хөкүмәтенә бер айҙа проекты тормошҡа ашырыуҙың финанс моделен әҙерләргә ҡушты.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында тәрбиәгә бала алған һәм патронат ғаиләләрҙәге балаларҙы ҡарау өсөн айлыҡ пособие, ошо ата-әсәләргә тейеште түләү, шулай уҡ опекаға һәм попечителлеккә тапшырылған балаларҙы ҡарау өсөн пособие күләмен 2020 йылдың 1 ғинуарынан 4 процентҡа арттырыу тураһында закон ҡабул ителде.

✓2019 йылда ауылда йәшәгән 677 ғаилә "Ауыл биләмәләрен тотороҡло үҫтереү" дәүләт программаһы буйынса торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға өлгәште. Был маҡсатта федераль һәм республика бюджеттарынан 650 миллион һум бүленде. Тағы 167 ғаилә торлә кимәлдәге бюджеттарҙан "өҫтәмә" ярҙамында 1 миллион һум тиерлек алды, тип билдәләнеләр ведомствола. Һөҙөмтәлә уҙып барған йылда ауылда йәшәгән 844 ғаиләгә 816 миллион һумлыҡ дәүләт ярҙамы күрһәтелде.

✓Башҡортостанда апрелгә тиклем барлыҡ ҡала һәм район үҙәге мәктәптәрендә бина биләмәһендә һәм уның эсендә суп-сарҙы айырым йыйыу өсөн контейнерҙар булырға тейеш. Был турала республика Хөкүмәтендә үткән "Мәғариф сәғәте"ндә белдерҙеләр. 2020 йылда ҡалаларҙа һәм район үҙәктәрендә урынлашҡан 432 мәктәпте майҙансыҡтар менән йыһазландырыу планлаштырыла.

✓Башҡортостанда киләһе йылда мейес яғып йылытылған бөтә мәктәптәрҙе ҡаҙанлыҡҡа күсерәләр, тип хәбәр итте республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин бөгөн "Мәғариф сәғәте"ндә. Саралар һауа-йылылыҡ режимына, һыу менән тәьмин итеүгә һәм капиталь ремонт үткәреүгә талаптарҙы үтәү маҡсатында Рәсәй Федерацияһы Президенты Мөрәжәғәтнамәһе йөкләмәләрен ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә уҙғарыла. Хәҙерге ваҡытта төбәктә 18 мәктәп элеккесә мейес яғып йылытыла.

✓ **Һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә арналған тармаҡ дискуссияһы барышында республика һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Гөлнара Зиннурова әйтеүенсә, әлеге көндә Башҡортостанда ваҡытынан алда бала табыуҙар һаны арта.**



БАШ ҠАЛАМ



# СТУДЕНТТАР ҠАЛАСЫҒЫ БУЛАСАҠ!

**Мәктәпте тамамлағас, синыфташтар осар ҡоштарҙай таралып, Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында уҡыйбыҙ. Шулай ҙа интернет селтәрендә гел аралашып торабыҙ.**

Ун бер йыл буйы бергә белем тауына үрләгән синыфташ әхирәттәремдең береһе Мәскәүҙә уҡый, икенсеһе - Ҡазанда. Мәскәүҙәгеһе, "БДИ буйынса балдарым юғары булғас, мине вуз эргәһендәге ятаҡҡа урынлаштырҙылар, яҡын, рәхәт. Балдар түбәнәйә барған һайын ятаҡты ла алыҫтаныраҡ бирәләр икән", тиһә, "Нисек булһа ла, Мәскәү Мәскәү инде", тип уфтанып ҡуйғылай инем. Ҡазандағыһы: "Кыҙҙар, белһәгеҙ икән, бында Университеиада ауылы бар! Иҫ киткес! Студенттар өсөн бөтөн унайлыҡтар һәм шарттар тыуҙырылған!" - тип шатлығы менән уртаҡлашҡас, бер аҙ көнләшеп тә ҡуйҙым. Ошо көндәрҙә генә Өфөлә лә студенттар өсөн кампус төҙәләсәген ишеткәс, бик ҡыуандым. Бәлки, беҙ уҡып сыҡҡансы төҙөп бөтөп, унда йәшәп ҡалырға ла өлгөрөрбөҙ, тип өмөтләнәм.

Дим районында буласаҡ ҡаласыҡ проект буйынса 96 338 квадрат метр майҙанда урынлашасаҡ. Унда 15 ҡатлы 5 ятаҡ корпусы, китапханаһы, конгресс үҙәге, аудиториялар һәм туҡланыу үҙәктәре булған ғилми-тикшеренеү корпусы, уҡыу һәм фәнни тикшеренеүҙәр өсөн кәрәкле ҡорамалдар менән йыһазландырылған лаборатор-тикшеренеү корпусы, бассейны, баскетбол залы, фитнес залы, скалодромы, футбол майҙаны һәм йүгереү юлдары эшләнгән асыҡ стадионды берләштергән спорт-уҡыу корпусы, медицина корпусы, ҡунаҡхана, ер аҫты паркингы буласаҡ.

Шәхсән үҙем мин был ҡаласыҡты студенттарҙың дәүләте тип күҙ алдына килтерәм. Уларға уҡыу, сәләмәтлектәрен нығытыу, ял итеү өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырыла икән, йәштәрҙең бурысы - мөмкинлектән файҙаланып, төплөрәк белем алырға һәм белемендә киләсәктә республиканың үҫеше, унын иҡтисадын нығытыу, Башҡортостандың абруйын донъя кимәлендә арттырыуға йүнәлтеү булырға тейеш тип ҡарайым һәм бындай хәстәрлеккә лайыҡлы яуап бирербеҙ, тип уйлайым. Хатта был кампус беҙҙең уҡыған йылдарҙа төҙөлөп бөтмәһә лә, беҙҙән һуң уҡырға инеүселәр өсөн ҙур стимул булып торасағына ышанам.

Вәсилә ӘХӘТОВА.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӘЖРИБӘ БАҺАЛАНДЫ



**Башҡортостан Башлығының тематик (тармаҡ) сәғәттәре иң яҡшы төбәк тәжрибәһе тип танылды һәм "Киләсәк төбәге" номинацияһында (төбәк менән идара итеүҙә иң яҡшы тәжрибә) федераль премияға лайыҡ булды.**

Мәскәүҙәге бүләкләү тантанаһында Радий Хәбировҡа премияны Рәсәй Президенты хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Сергей Кириенко тапшырҙы. Башҡортостан менән бергә Ленинград һәм Төмән өлкәләре лә номинанттар иҫәбендә инде, ләкин республика ышаныслы рәүештә еңеү яулаңы. "Беҙ, субъект башлыҡтары, ысынлап та, үҙебеҙ нимәләр уйлап сығарырға тырышабыҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙ конкурентлы мөхиттә йәшәйбеҙ. Шуға ла беҙ - Татарстандағы эштәргә, ә улар беҙҙең эштәргә күҙ һалғылай. Беҙ Мәскәү өлкәһенән, Мәскәүҙән, Силәбенән, башҡа төбәктәрҙән өйрәнәбеҙ, - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. - Бындай тактика ғәмәлгә ашырыла. Ләкин хәҙер ошо эште системаға һалыу мөмкинлеге бар".

Радий Хәбиров йылдан ашыу Башҡортостан хөкүмәтендә "Инвестиция сәғәте", "Туризм сәғәте", "Төҙөләш һәм транспорт сәғәте", "Ҡала мөхите сәғәте", "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте", "Мәғариф сәғәте", шулай уҡ "Етәксе сәғәте" кеүек тематик кәңәшмәләр үткәрә. Улар теге йәки был тармаҡтағы киҫкен мәсьәләләргә иғтибарҙы тупларға, ҡыҙыҡһыныу белдергән яҡтарҙы йәлеп итеп, уларҙы комплексы хәл итергә мөмкинлек бирә. Йыш ҡына көн тәртибенә республика халҡының мөрәжәғәттәрендә күтәрелгән темалар сығарыла. Әйткәндәй, Эксперт социаль тикшеренеүҙәр институты булдырған премия төүгә тапшырыла һәм 10 номинацияны үҙ эсенә ала. Уның маҡсаты - Рәсәй төбәктәренең уңышлы, иңғай социаль йөгөнтө яһаған тәжрибәләрен билдәләү.

# СИТТӘ УҠЫҒАНДАР ҘА БЕҘҘЕКЕ

**Башҡортостанда республиканан ситтә уҡыған студенттарға ярҙам программаһы булдырыла. Атап әйткәндә, йыл һайын Башҡортостан студенттарының осрашыуҙарын ойоштороу, шулай уҡ "Үҙ-ара ярҙам кассаһы"н булдырыу күҙаллана. Республикабыҙҙан ситтә йәштәргә ярҙам итеүҙең яңы форматтары тураһында "Мәғариф сәғәте"ндә Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин һөйләне.**

"Бында иң мөһиме уларҙы ҡайтарыу түгел, ә ярҙам күрһәтеү, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Күптәре кире әйләнеп ҡайтмаһа ла, ҡурҡыныс юҡ, был уларҙың яҙмышы. Йәштәр тыуған республикаһы менән бәйләнешен юғалтмаһын ине. Муниципалитеттар етәкселәре беҙгә уҡыуҙы тамамлаусылар менән эшләү варианттарын һәм алымдарын тәҡдим итһен". Башҡортостан етәксеһе ниндәйҙер яңы нәмә уйлап сығарыу мотлаҡ түгел тип билдәләне, шул уҡ ваҡытта ул "Үҙ-ара ярҙам кассаһы"н булдырыу идеяһын тулыһынса хупланы. Өйҙәренән алыҫта йәшәгән йәштәргә финанс ярҙамы, күп булмаһа ла, кәрәк. "Төрлө хәлдәр була. Мәҫәлән, каникулдар башланды, ә билетҡа аҡса юҡ, шулай килеп сығыуы мөмкин, балалар бит", - тине Радий Хәбиров һәм үҙенең Төркиәлә уҡыған ваҡытын иҫенә төшөрҙө, Тунис миҫалын килтерҙе. Йыл һайын Тунистың Бойондороҡһоҙлоҡ көнөндә ил илселеге вәкилдәре үҙҙәренең студенттарын йыйа, уларҙы һыйлай торған булған. "Уларҙың ҡәнәғәт йөҙ менән ҡайтып, осрашыу ваҡиғаһын беҙгә һөйләгәндәрен әле лә хәтерләйем", - тип өҫтәне Радий Хәбиров һәм ситтә уҡыған Башҡортостан студенттары ҡатнашлығында ошондай осрашыуҙар форматын әҙерләргә ҡушты: "Бында йәштәрҙең ҡыҙыҡһыныуҙарын иҫәпкә алырға кәрәк: улар нимә теләй, кемдә күрергә теләй? Осталыҡ дәрестәре, шулай уҡ концерт йәки дискотека ойоштороға була. Мин дә бындай осрашыуға ҙур теләк менән килер инем", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# БАЛАЛАР КҮБЕРӘК ТЫУҺЫН!

**ЭКО процедураһына дәүләт ярҙамын арттырырға хәл ителде. Был хаҡта Радий Хәбиров республика хөкүмәтендәге кәңәшмә йомғаҡтары буйынса социаль селтәрҙә хәбәр итте.**

2020 йылда ошо маҡсатҡа өҫтәмә рәүештә 83 миллион һум бүленә. Республика Башлығы һүҙҙәренсә, шуның һөҙөмтәһендә 3 меңгә яҡын бала тыуырға тейеш. "Бөгөн ҡарар ҡабул иттек, уның ярҙамында киләһе йылда республикала көмендә 650 балаға күберәк тыуасаҡ! Беҙҙә ЭКО процедураһына дәүләт ярҙамы ҡаралған, ләкин элек аҡса етмәй ине. Быйыл 2025 ҡатын-ҡыҙ ошо мөмкинлектән файҙаланды, ә киләсәктә өҫтәмә рәүештә 83 миллион бүләбеҙ, һөҙөмтәлә ЭКО ярҙамында 3000 самаһы сабый донъяға киләсәк. Артабан өс мең ҡатын-ҡыҙҙан сиратты нулгә тиклем кәметәбеҙ һәм ЭКО-ны әүҙемерәк үҫтерерәбеҙ. Ошо кәңәшмә йомғаҡтары буйынса кәйеф бик шәп, әйтерһең дә, йәнә атай булған кеүекмен!" - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

Һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә арналған тармаҡ дискуссияһы барышында республика һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Гөлнара Зиннурова әйтеүенсә, әлеге көндә Башҡортостанда ваҡытынан алда бала табыуҙар һаны арта. Парҙарҙың 15 процентҡа яҡыны - түлһеҙ. Был осраҡта заманса технологиялар, тап ЭКО ярҙамға килә. Республикала ошо процедураны дүрт медицина учреждениеһында эшләйҙәр.

# КҮҘӘТӘЛӘР

**Декабрь башынан Башҡортостандың федераль трассаларында 59 фотовидеотеркәү камераһы эшләй башланы, өс көндә 2078 материалды эшкәртеүгә ебәрҙек, тип хәбәр иттеләр Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетынан.**

Билдәләнеүенсә, "Урал буйы" юл идаралығы, Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты һәм Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы араһында юл камераларын файҙаланыу буйынса өс яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйылды. Килешеүгә ярашлы, юл идаралығы - техник хеҙмәтләндереү, метрологик оҙатыу һәм комплекстарҙың бәйләнеш каналдары өсөн түләү, Эске эштәр министрлығы - административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында ҡарарҙар сығарыу, Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты фотоматериалдарҙы эшкәртеү һәм ҡарарҙарҙы почта аша ебәреү өсөн яуаплы. Республикала бөтәһе 305 камера эшләй. Йыл аҙағына уларҙың һаны 540 берәмеккә етә. Киләһе йылда улар мендән ашыу була. Юл хәрәкәтен боҙоусыларҙың штрафы Башҡортостандың Юл фондына килә.

"Был камераларҙы беҙ водителдәргә "һүнар итеү" һәм "кесә ҡалынайтыу" өсөн ҡуймайбыҙ. Беҙ уларҙы ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалыу өсөн ҡуябыҙ. Водителдәрҙе камералар урынлашҡан урындар тураһында даими иҫкәртеү мөһим", - тине республика етәксеһе Радий Хәбиров.Быйыл юл-транспорт ваҡиғаларының дөйөм һаны 2018 йыл менән сағыштырғанда 4,4 процентҡа кәмегән (4024-тән 3852-гә тиклем), йәрәхәтләнеүселәр - 3,5 процентҡа (5059-ҙан 4880 кешегә тиклем), ә һәләк булғандар 17,3 процентҡа аҙайған (510-дан 422-гә ҡәҙәр).

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендә математика һәм мәғлүмәт технологиялары өлкәһендә һәләтле балалар өсөн республика лицей-интернаты төҙәлә, тип хәбәр итте Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин. Объекттың төҙөләшө киләһе йылда башлана. Өфө йылғаһы буйындағы интернат тибындағы лицей 2021 йылда асыласаҡ.

✓Яңы йыл байрамдары алдынан Башҡортостан Республикаһының Милли музейы "Яңы йыл тураһында" ретро-күргәҙмә ойоштора. Витриналарҙа 500-гә яҡын предмет: шыршы уйынсыҡтары, аксессуарҙар, XX быуаттың 40-60-сы йылдарындағы яңы йыл открыткалары ҡуйыла.Күргәҙмә залында яһалған яңы йыл инсталляцияһы ла совет осоро мөхитенә сумырға ярҙам итер.

✓Өфөлә 2-се башҡорт лицейына яҙыусы Ғәли Ибраһимовтың исеме бирелде. 2019 йылда башҡорт халҡының данлы улы, яҙыусы, шағир, уҡытыусы, атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәли Ибраһимовтың тыуыуына 100 йыл тулды. Ошо уңайҙан белем биреү учреждениеһында тантаналы сара уҙҙы, тип хәбәр иттеләр мэрияның матбуғат хеҙмәтенән.

✓Өфөлә Конгресс-холл янындағы парковка ябылды. Майҙансыҡта яңы йыл саралары ойоштороla. Таңғы 6-нан киске 9-ға тиклем унда балаларҙы килтергән автобустарға ғына туҡтарға рөхсәт ителә. Мэрияла ошо ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтарҙы аңлап ҡабул итеүҙәрен һоранылар.

✓Өфө районында 2020 йылдың ноябрь аҙағына тиклем 640 уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп һәм 160 урынлыҡ балалар баҡсаһы асыу күҙаллана. Шулай итеп, киләһе йылдың 30 ноябренә хәтлем Михайловка ҡасабаһында ике яңы социаль объект барлыҡҡа киләсәк.

✓Өфөлә "Төҙөүсе" стадионы янында рәсми рәүештә Шорт-трек үҙәге асылды. Спорт объекты республиканың 100 йыллығына федераль һәм төбәк бюджеттары иҫәбенә төҙөлгән. Унда ябыҡ һырғалаҡ, хореография, тренажер залдары, массаж, кейенеү бүлмәләре һәм башҡа биналар бар. Киләсәктә үҙәк Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштарын ҡабул итергә мөмкин.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АЛМАШҠА - МӘҘӘНИ САРАЛАР

**Башҡортостан - спорт, туризм, мәҙәниәт һәм сәләмәтлек территорияһы. Республикала быға тиклем "Һуңғы ҡыңғырау", һабантуй байрамдары ваҡытында сауҙа нөктәләрендә алкоголле эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйыу буйынса хоҡуҡи акттар ҡабул ителгәйне. Яңы йыл алдынан Хөкүмәттәге кәңәшмәләрҙең береһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Яңы йыл байрамдарында ла - ә был кәм тигәндә аҙна-ун көн - ошондай сикләү тәҡдимен индерҙе.**

19 декабрҙә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары иһә шунда уҡ өс уҡыуҙа ошо хаҡта закон ҡабул итеп тә ҡуйҙы. Уға ярашлы, 3 ғинуарҙа республика территорияһында спиртлы эсемлектәр һатыу тулыһынса тыйыла, ә 4-6 ғинуарҙа тәүлегенә дүрт сәғәт - иртәнге 10-дан төшкө 2-гә тиклем генә һатыласаҡ. "Айырым граждандарҙа был ҡанун ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырыуы мөмкин, әммә беҙ уны күптәрҙең сәләмәтлеген һәм ғүмерен һаҡлап ҡалыуҙы уйлап ҡабул иттек", - тигәйне был хаҡта парламент рәйесе Константин Толкачев.

Яңы йылдың быға тиклем булған һәм тотош 10 көнгә һуҙылған "аҡбашлы", һыра-шарап-сәмәйле табындарына алмашҡа республика етәкселеге ниндәй альтернатива тәҡдим итә һуң? Ошо көндәрҙә "Электрогазета" ойоштorған матбуғат конференцияһында һүҙ тап ошо хаҡта барҙы, сөнки республика етәксеһе фекеренсә, ҡалаларҙың ғына түгел, муниципалитеттарҙың мәҙәни, спорт тормошон башҡа йылдарҙағынан айырмалы төрлө саралар менән байытҡанда, һәр кем күңеленә яҡын шөғөл тапҡанда, улар табын артында ултырыуға түгел, ә ғаилә менән әүҙем ял итеүгә өҫтөнлөк бирәсәк.

БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова белдереүенсә, хатта республиканың иң төпкөл ауылдарында ла төрлө мәҙәни саралар ойоштороласаҡ. Ҡайҙа нимә буласағын "Культурный мир Башкортостана" сайтындағы "Саралар календаре 2020" kulturarb.ru/ru/kalendar-meropriyatij-2020 һылтанмаһы буйынса һәм муниципалитеттарҙың сайттарында табырға, таныштырға мөмкин.

- Ҡышҡы күңел асыу саралары ла, квесттар ҙа, оҫталыҡ дәрестәре лә, тамашалар ҙа ойоштороласаҡ. Мәҙәниәт усаҡтарында балалар өсөн тамашалар көндөҙ генә түгел, кискеһен дә ҡуйыласаҡ. Музейҙарға инеү бушлай буласаҡ. Бынан тыш, дауаханаларҙа, балалар йорттарында, махсус интернаттарҙа тәрбиәләнеүселәр ҙә байрамдан мәхрүм ҡалмаясаҡ - улар өсөн махсус программалар әҙерләнә, - тине Әминә Ивнәй ҡыҙы.

Ғәмүмән, мәғариф, спорт, мәҙәниәт учреждениелары көсө менән әҙерләнгән саралар берҙәм "Башҡортостан - спорт, туризм, мәҙәниәт һәм сәләмәтлек территорияһы" девизы аҫтында үтәсәк. БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин белдереүенсә, байрам көндәрендә ғаилә уйындары ла ойоштороласаҡ. Унда 1017 мәктәп ҡатнашырға теләк белдергән. Муниципаль этапты үтеүселәр 18 ғинуарҙа республика этабында көс һынашасаҡ. Унда 70 команда ҡатнашыуы көтөлә.

Шулай уҡ быйыл икенсе тапҡыр "TERRA ZIMA" фестивале ойоштоpола. БР Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов белдереүенсә, 1 ғинуарҙа иртән "Забег обещаний" үтһә, кисен Башҡортостан йондоҙҙары концерты көтөлә. 2 ғинуарҙа сәғәт 12-нән 2-гә тиклем Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренән килгән көслө кешеләр ҡатнашлығында боҙ-батлл көтөлә. 3 ғинуарҙа беренсе тапҡыр Ҡарһылыуҙар парады уҙасаҡ, 4 ғинуарҙа "Ҡашҡаҙан" паркында республиканың егеүле аттары экипаждарының парады ойоштороласаҡ һәм йәш өфөләр аттарҙа йөрөү мөмкинлегенә эйә буласаҡ! Әйткәндәй, быйыл "Торатау" конгресс-холы эргәһендәге "Ватан" паркында ла, Торатау тауы буйында ла Ҡыш бабайҙың тирмә-резиденцияһы булмаясаҡ. Уның ҡарауы, "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында башҡорт тирмәләренән этноауыл төҙөләсәк, унда төрлө спорт ярыштары, шул иҫәптән уҡтан атыу ҙа ойоштороласаҡ.

Яңы йыл байрамдарында ҡарға сумған тау түбәләренә сәйәхәт итергә теләүселәр өсөн "Урал легендалары" поезы "Өфө-Абҙаҡ-Өфө" маршруты асыласаҡ. Ә бына Башҡортостандың барлыҡ тау саңғыһы базаларына һәм шифаханаларына урындар күптән инде алынып бөтөлгән. Һорау ҙур булғанлыҡтан, уларҙа быйыл бер ниндәй ташламалар ҙа юҡ. Ни хәл итәһең - баҙар ҡанундары... Әммә был ғына башҡортостандарҙың байрам кәйефен һәм әүҙем ял итеү ниәтен һүрелдермәҫ, моғайын.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠАРҺЫЛЫУЫБЫҘҘЫ...

## башҡортса кейендерәйек!

**(Башы 1-се биттә).**

Бер ай самаһы Ҡарһылыуҙың биҙәүестәре әҙерләнде, уларҙы ниндәй төҫтәрҙә ҡулланып эшләү хәл ителде. Һөҙөмтәлә, традицион башҡорт кейеменән алыҫ китмәҫкә булдыҡ. Сөнки беҙгә тиклем барыһы ла уйлап табылған, барыһы ла матур, зауҡлы. Ниһайәт, БР "Ағиҙел" башҡорт сәнғәт кәсептәре дәүләт унитар предприятиеһы, биҙәүестәрҙең 3D-моделдәрен эшләүҙә ярҙам иткән дуҫым Салауат Ғәниев, уларҙы тегеүсе әсәйем Зөлфиә Ғатауллина менән берлектә бер ай эсендә ике костюм тектек. Ҡарһылыу образы ҡашмау, селтәр, аҡ күлдәк һәм күк камзул ярҙамында һынландырылды. Ҡарһылыуҙың ҡашмауы һәм селтәре нигеҙенә ҡыҙыл туҡыма урынына күк төҫтәгеһе ҡулландыҡ, ҡыҙыл мәрйендәрҙе аҡ сәйләнгә алмаштырҙыҡ һәм көмөш тәңкәләр урынына ҡар бөртөктәре формаһындағы пластик биҙәүестәр тектек. Башҡорт милли кейемен тулыһынса эшләп бөтөү мөмкин түгел, элек тә ир-егеттәр алыҫ походтарҙан ҡатындарына тәңкәләр, миҙалдарын алып ҡайтып бирер булған һәм селтәрҙәргә яңы элементтар өҫтәлгән. Ошо боронғо ғәҙәткә таянып, муйынсаҡтан эшләнгән таждар һатып алып, Ҡарһылыуҙың ҡашмауына тегеп ҡуйҙыҡ. Киләсәктә Ҡарһылыу костюмдарын төрләндереп эшләргә тырышасаҡбыҙ, әммә ҡанундарҙан тайпылыштар булмаясаҡ. Әйткәндәй, Ҡыш бабай ҙа юлда, Яңы йылға тиклем уны ла киң йәмәғәтселеккә сығарып өлгөрәрбеҙ, тип ышанам.

Балалар - беҙҙең киләсәк, тигән бөтәһенә лә билдәле һүҙҙәр бар. Әммә Башҡортостандағы балалар бәләкәйҙән башҡорт мәҙәниәтендә, башҡорт рухында тәрбиәләнә ала һәм беҙгә Снегурочканы - Ҡарһылыуға, Дед Морозды Ҡыш бабайға алмаштырырға бер нәмә лә ҡамасауламай. Хатта урыҫ атамаларын ҡалдырғанда ла үҙебеҙҙең милли кейемдәрҙә булһындар улар. Беҙ әҙерләгән костюмдарҙы башлап республика һәм Өфө ҡалаһының төп Яңы йыл байрамдарында булһа ла ҡулланырҙар, артабан халыҡҡа оҡшап ҡалһа, киң таралыр һәм Башҡортостандың брендына әйләнер, тип ышанам.

**Илдар ҒАТАУЛЛИН,**
**БР "Ағиҙел" башҡорт сәнғәт әйберҙәре кәсептәре предприятиеһы дизайнер-конструкторы, башҡорт милли кейеме буйынса белгес.**

ҠАЛА СОВЕТЫНДА

# БАШҠОРТСА СЫҒЫШТАР

✔ **Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашырыу саралары ойоштора башлауы, әлбиттә, үтеп барған йылдың күңелле ваҡиғаларының береһе булды.** Мәҫәлән, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырыштарының береһендә депутат Әлфәрис Байсурин үҙ телмәрен туған башҡорт телендә яңғыратҡандан һуң, был өлгөгә республиканың башҡа район, ҡала депутаттары ла эйәрҙе. Ошо көндәрҙә генә Өфө ҡала Советының сираттағы 49-сы ултырышында Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары, транспорт һәм элемтә бәйләнеше идаралығы начальнигы Илдар Юланов шулай уҡ башҡортса телмәр тотто. Өфөнөң депутаттар корпусы өсөн ситенерәк хәл булһа ла (улар араһында башҡортса белгән бер кеше лә юҡ), ҡайһы берәүҙәрҙең йөҙөндә еңелсә йылмайыу барлыҡҡа килһә лә, был хәл барыбер ҙә ыңғай ҡабул ителде. Ул йылмайыу, бәлки, Илдар Юлановтың ул тиклем үк шыма булмаған башҡорт телмәренә ҡарата тыуғандыр, тип фараз итәйек тә... исмаһам, башҡорт милләттәренә үҙ туған телен өйрәнеү мотлаҡ кәрәк, тип һығымта яһайыҡ.

✔ **Ҡала Советы депутаттары Өфөнөң тиҙ медицина ярҙамы хеҙмәткәрҙәренә торлаҡ алыуға компенсация түләүҙәре тәртибен раҫланы.** Билдәләнеүенсә, баш ҡалабыҙҙа көн дә 74 тиҙ ярҙам бригадаһы тәүлек әйләнәһенә саҡырыуҙар буйынса эшләй. Хеҙмәт төрө ауыр булғанлыҡтан, тармаҡ кадрҙар ҡытлығы кисерә. Быйыл 9 айҙа тиҙ медицина ярҙамы станцияһында врачтар менән тәьминителеш 64,7 процент ҡына тәшкил иткән. Был компенсация ярҙамы кадрҙар ҡытлығын бөтөрөү, йәш кадрҙарҙы ошо тармаҡҡа йәлеп итеү өсөн күрһәтелә. Компенсация түләүҙәрен 2020 йылдың 1 ғинуарынан тармаҡта эш башлаған кешеләр ала. Ул врачтар өсөн 500 мең һум, фельдшерҙар өсөн 350 мең һум тәшкил итәсәк. Компенсация 5 йыл дауамында өлөшләп түләнәсәк.

✔ **Булып үткән Өфө ҡала Советы сессияһында "Уралмотострой" акционерҙар йәмғиәте рәйесе Павел Рабухин менән Өфө нефть техник университеты профессоры, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы Айрат Шаммазов "Өфө ҡалаһының почетлы гражданы" исеменә лайыҡ булды.** "Был беҙҙең "Уралмотострой" коллективына бирелгән баһа, - тине Павел Рабухин. - Сөнки Өфөнөң бөтөн куперҙәре беҙҙең тарафтан төҙөлгән бит. Баш ҡаланың көндән-көн матурланыуында беҙҙең дә өлөш булғанына ҡыуанам..."

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тәнгә бетсәләр сыҡһа, ҡысытһа

❖ 5-6 йомортҡаны 10-12 минут бешерергә, иплəп кенә һарыларын алырға һәм оҙон энәгә йәки тимер сыбыҡҡа ҡаҙап, аҡ шыйыҡса тама башлағансы ут өҫтөндә тоторға. Шул шыйыҡсаны шешәгә йыйырға һәм бетсәле, ҡысытҡан урынға һөртөргә.

### Йылҡы ите ашағыҙ

❖ Йылҡы итендә A, E, B1, B2 витаминдары, тимер, баҡыр, калий күп. Был ит йөрәк-ҡан тамырҙары, аш һеңдереү ағзалары сире, шәкәр ауырыуы менән ыҙалаусыларға файҙалы. Тиҙ эшкәртелә: һыйыр итен эшкәртеүгә 24 сәғәт, йылҡы ите өсөн 3 сәғәт ваҡыт кәрәк. Йылҡы ите ҡандағы холестеринды кәметә.

❖ Майы ла файҙалы. Йылҡы ите, майы үт ҡыуҙырыуға һәләтле, ашҡаҙан ауыртҡанда ла ярҙам итә, бауырҙы, эсәктәрҙе таҙарта. Өшөгән урындарға, һалҡын тейгәндә, уны тәнгә һөртөү һәм быуын ауырыуҙарын дауалау өсөн майҙар яһағанда ҡулланалар. Башҡорт борон замандан уҡ йылҡы итен файҙаланып, ҡәҙерен белгән бит!

### Бил ауыртҡанда

❖ 2 ҡалаҡ киптерелгән ваҡланған әремгә 100 грамм үҫемлек майы һалып, болғатҡылап ҡайнатып сығарырға. Йоҡларға ятыр алдынан билгә бәйләргә. Майҙы һыуытҡыста һаҡларға.

❖ Массаж яһау, йылытыу ҙа бар дауаханала.

### Ҡабаҡ

❖ Үт ҡыуығы, йыуан эсәк сиренән дә ҡабаҡ ашарға.

❖ Бөйөрҙәрҙә, бәүел ҡыуығында таш булғанда аҙна буйы көнөнә 2-3 тапҡыр ярты стакан ҡабаҡ һуты эсергә.

❖ Ҡабаҡтың орлоғо ла файҙалы: балаларҙың эсәктәрендә паразит селәүҙәр булғанда сей көйө ашатаһың һәм ҡалаҡ осонда ғына бал ҡаптырһаң.

❖ Әммә ҡан баҫымы нығ төшкәндә һәм эс китеп сирләгәндә ҡабаҡ ашауҙан тыйылып торорға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Буйға һуҙылған ике яҡлы кәкерсәкле үҙәк формаһындағы фигураларҙы (һуҙылған х) айырым төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин. Үҙәк ырғаҡтар, йәйәләр, япраҡтар менән ҡапланып йәки икегә айырылып киңәйтелгән һәм уртала ҡыя шаҡмаҡ барлыҡҡа килгән.**



*Үҙәктәге "мөгөҙҙәр". Автор һүрәте.*

Һирәк булһа ла көньяҡ-көнсығыш ҡаймаһында остарында бер-ике ҡатлы парлы кәкерсәктәр булған буй һәм арҡыры һыҙаттарҙан торған әүернәләр осраған. Урын тартмаларының ҡатмарлы биҙәк бағаналары күп төрлө.

Япраҡтар, елпеүес һымаҡ таж япраҡтары менән тулыландырылған ҡусҡар биҙәктәр үҫемлек биҙәктәренә яҡынайтылған. Күрәһең, композицияның мөйөштән уртаға ҡарай төҙөлөүе (серге һәм түшәктәрҙә) йәки һуҙылып киткән һыҙат рәүешендә булыуы (ҡайма һәм тартҡыларҙа) ошондай үҙгәрештәргә килтергән. Һүрәттә зифа ағастар йәки ҡупшы ҡыуаҡтар, үремдәр (гирлянды), эйелеп торған йәш үренделәр барлыҡҡа килгән. Ҡайһы бер ҡайылған әйберҙәрҙә Азия алды традициялары йоғонтоһо һиҙелә: уларҙа Урта Азия орнаменттары тасуирламаһында өсәрле япраҡ, анар, баҙам, борос емештәре, мәк һәм мамыҡ төймәләктәре тип атап йөрөтөлгән элементтар бар. XX быуатта нағыштарҙа имән, ҡайын япраҡтары, таждары асылған сәскәләр, биш ҡырлы йондоҙҙар килеп сыға.



*Урта Азия орнаменты элементтары ингән ҡатмарлы фигуралар.*



*Ике осло ырғаҡтар, айырым фигуралар. Автор һүрәте (экспедициялар материалдары буйынса).*



*Үҫемлек биҙәктәре.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

УЙЛЫҒА - УЙ

**Бер танышымдан: "Быйыл һуғым һуяһыңмы?"- тип һорағас, "Әлбиттә, мин бит - башҡорт! Башҡорт итһеҙ йәшәй алмай..." тигәйне. Әлхәмдулиллаһ, ана шул һуғым мәсьәләһе буйынса миңә лә йыл һайын ҡыш баштарында яҡын-тирәләге берәй ауылға барып, теге йәки был ауыл байы менән танышыу бәхете тейеп тора.**

# АУЫЛ БАЙҘАРЫ КҮБЕРӘК БУЛҺЫН!



"Ауыл байы" тигәндәй, илебеҙҙәге күп тиҫтерҙәрем һымаҡ, мин үҙем дә "Хәҙер донъя тигеҙләнде, фәҡир ҙә юҡ, бай ҙа юҡ", тип йырлап үҫкән дәүер кешеһемен. Ысынлап та, беҙ үҫкәндә ауылдарҙа байҙар булманы, тик бәғзе берәүҙәрҙең башҡаларға ҡарағанда бер аҙ ғына хәллерәк йәшәгәне һиҙелә ине. Әммә шул уҡ ваҡытта көсөнән килгән ҡәҙәре мал үрсетергә, йорт-ҡураһын төҙөк тоторға тырышып йәшәгән был кешеләр бүтәндәрҙән әллә ни ныҡ айырыла ла алманы. Ул заман кешеләренә байып йәшәп китергә бер ниндәй ҙә форсат булманы шул. Өйөндә затлыраҡ әйберҙәре күренә башлаған бәғзеләр менән шунда уҡ "Эш хаҡың шуныса ғына, ә был нәмәне ниндәй аҡсаға алдың?" тигән һымаҡ һорауҙар менән "тейешле органдар" ҡыҙыҡһынырға тотона. "Кәрәкле мәғлүмәттәр"ҙе был "ағайҙарға" ваҡытында еткереп тороусылар ҙа булғандыр инде. Хаҡлы ялға сыҡҡас, йомош-фәләнгә егеп йөрөү өсөн атайым мәрхүмдең бер бейә алғанын хәтерләйем. Әммә күп тә тормай ауыл советы рәйесе: "Төхфәт ағай, атыңды тотон (беҙҙең яҡта һуйыуҙы "тотоноу" тип әйтәләр), шәхси милек рөхсәт ителмәй..." - тип килеп тә еткән. Атайым, ана шулай, бесән-маҙар ташыу өсөн совхоз аттарын һорап торорға мәжбүр булып йәшәне...

Беҙ үҫкәндә һәр китапта, бар ҡараған кинофильмдарҙа әле үҙем әйткән ауыл байы "ҡалын ҡорһаҡлы, ҡомһоҙ, һаран, ярлыларҙы көн-төн иҙеүсе" кеше итеп һүрәтләнде. Октябрь революцияһынан һуң, ысынлап та, байҙарҙы - халҡыбыҙҙың иң эшсән ҡатламын "нәжескә буяп" ташлағандар ине шул. Бәхеткә, һуңғы ике-өс тиҫтә йылдарҙа граждандар һуғышы, колхозлаштырыу осорҙарына ҡарашыбыҙ байтаҡҡа (хатта бөтөнләйгә кире юҫыҡҡа!) үҙгәрҙе. Ике-өс йыл тирәһе элек гәзиттәребеҙҙең береһендә "Байҙар ҙа ихтирамға лайыҡ" тип аталған мәҡәләм дә донъя күргәйне. Бай кешеләрҙе хәҙер мин "йыуан ҡорһаҡ", тип түгел, киреһенсә, көн-төн тимәй, ал-ял белмәй эшләүсе кешеләр тип һанайым.

Оҙайлы хәрби хеҙмәттән отставкаға сығып ҡайтҡаны бирле, әллә нисә йыл рәттән Баймаҡ районының төрлө ауылдарына барып, һуғымға йылҡы малы һатып алам. Йышыраҡ Сәйғәфәр ауылынан Нуриман исемле ике туған ҡустымдан алырға тура килә һуғымлыҡты (быйыл өлгөрмәй ҡалдым). Тыуған ауылым Мәмбәттән Рәсүл исемле ауылдашымдан, Байым ауылынан Шәфҡәт атлы егеттән, Татлыбайҙан Зәбир байҙан алғыланым.

Быйыл иһә Әхмәр ауылына барырға тура килде. Күк Ирәндек буйында урынлашҡан был ауылда Әхәт исемле бер кеше хаҡында таныштарыбыҙ аша ишетеп ҡалдыҡ. Алдан һөйләшкән буйынса, ауылдың иң осонда ултырған өйҙәрен табып алдыҡ. Киң ихатаһы һәр төрлө ауыл хужалығы техникаһы, ялан кәртәләре йылҡы, эре мөгөҙлө мал-тыуар менән тулған был хужалыҡ әллә ҡайҙан уҡ күҙгә ташлана. Быйыл Урал аръяғы райондарында бесән яғы наҡыҫ булыуына ла ҡарамаҫтан, эре-эре эҫкерттәр менән тулған бесәнлеген күргәс, "Бында ысын бай хужа йәшәй икән", тигән һығымтаға киләһең. Урамында торған "Ниссан" автомобиле лә йорт хужаһының эшлеклелегенә ишара... Ошо хаҡта уйлап килеп туҡтауыма ҡаршы алырға бай үҙе лә килеп сыҡты. Күрешеп, танышҡас, ыҡсым ғына "башҡортса" һаҡал ебәргән был Әхәт уҙамандың фамилияһын һорай һалып алдым. Өмөтбаев фамилияһын ишеткәс тә: "Рамаҙан Өмөтбаевтың туғанымы әллә?"- тип һорап ҡуйҙым. "Шәжәрәне йәйә биреп эҙләһәң ни, уның бәлки, берәй ботағын табырға ла булалыр инде. Башҡорттар барыһы ла бер-береһенә туған..." - тип көлдө яҡташым, мине һарай яғына әйҙәне. Һуғымлыҡ малды айырым кәртәгә бикләп ҡуйған икән. Ҡолаҡтарын шымайтып, бынабына бейек ҡойма аша һикереп сығырҙай булып тулап торған, һыртында ҡара юлаҡлы башҡорт тоҡомло ажар ҡола айғырҙы күрһәтеп: "Үҙең инеп тотаһыңмы әллә?" - тип йылмайҙы хужа тағы. "Мин ғүмер буйы һалдат дауалап ҡына йөрөгән кешемен, йылҡы менән эш иткәнем юҡ. Үҙең генә тотоп йығып һалмаһаң..." "Әһә, аңланым, "зеленка" менән генә әмәл итә торған кешеһең икән!.." - тип "сәнстереп" алды йор һүҙле бай. "Эйе, - тигән булдым, - кәрәк саҡта зеленка менән, ә бәғзе ваҡыт скальпель менән дә булышҡыланым..." Үҙемдең ҡасандыр хәрби госпиталдә операциялар яһаусы хирург булыуым хаҡында һүҙ шыйыҡлатып торорға ваҡыт юҡ ине. Беҙ танышып, ул-был иткән арала, яныбыҙға килеп еткән өс егет дәррәү эшкә кереште. Тәү ҡарауҙа, бындай ғәйрәтле малды тотоп алыу түгел, янына барыу ҙа ҡурҡыныс һымаҡ! Әммә баһадир егеттәр күҙ асып йомған арала, йәйен-ҡышын ҡырҙан ҡайтмаған, тамам ҡырағайланып киткән был уҫал тайҙы ҡороҡлап тотоп, һуя торған урынға алып та китте.

Йыл да башҡорт егеттәренең ана шундай таҫыллығына ғәжәпләнеү ҡатыш ғорурлыҡ тойғоһо кисереп, уларҙың ошо эшен оло кинәнес менән күҙәтәм. Быйыл ҡар әҙерәк булыу сәбәпле, итте ерҙең тупрағына буяп бөтмәһәләр генә ярар ине, тип уйлап та өлгөрмәнем, байҙың Артур исемле бер улы моронона ниндәйҙер тимер ҡоролма таҡҡан тракторы менән килеп тә туҡтаны. "Бисмилла"лап салынған малды махсус яһалған ырғаҡтар ярҙамында дүрт аяғынан күтәртеп, һуйыусылар, хатта эйелмәй генә тороп, эшкә кереште. Тай ярайһы ғына көр булып сыҡты. Өйрәнгән ҡулдары "уйнап ҡына торған" Венер, Илфат исемле был егеттәр үҙ эшен яҡшы белгән тәжрибәле хирургты хәтерләтә. Әхәт уҙамандың күршеләре икән. Хужаның улдары Артур һәм Илнур менән берлектә ун биш-егерме минут эсендә тап-таҙа ғына итеп тайҙың тиреһен дә һыҙырып ҡуйҙылар. Егеттәр һуғымдың һандарын бүлгеләгән арала йорт хужабикәһе Гүзәл ханым, ярҙамға килеп еткән һеңлеһе Айгөл, Ләйсән килен менән "һә" тигәнсе эсәк-ҡарындарҙы "арытып", "бешекләп", эшкәртеп тә ҡуйҙылар. Эште тамамлап, ҡулдарҙы йыуып, ул-был иткәс, уңған хужабикә барыбыҙҙы ла бай йыһазландырылған иркен өйгә саҡырып индерҙе. Аш бүлмәһендә ҙур өҫтәл тултырып һый-хөрмәт әҙерләгән икән. Хәбәрҙәрен һөйләй-һөйләй, һимеҙ ит, бишбармаҡ, ҡоротло һурпа менән башҡортсалап ҡыҫтай-ҡыҫтай беҙҙе һыйларға кереште. Сервант кәштәһендә торған "Диплом"ға иғтибар иттем. Тағын бер боронғо башҡорт традицияһын дауам итеүсе - мәргән уҡ атыусы ла булып сыҡты Әхәт бай. Уҡсылар бәйгеһендә икенсе урынды алған өсөн ана шул диплом менән бүләкләгәндәр икән уны. Иттәрҙе машинаға тейәп, хушлашып сығып барғанда, байҙың ихата тышына Сибай ҡалаһынан тағы бер яҡташ килеп туҡтаны. Тана алып һуйырға һөйләшкән икән...

Ата-бабаларыбыҙҙың борондан килгән гүзәл бер йолаһын күҙ алдыбыҙға килтереү маҡсатында мал һуйыу процесын бер аҙ ғына булһа ла шулай ентекләп яҙырға тырыштым. Милләттәштәребеҙ араһында Әхәт Өмөтбаев һымаҡтарҙы осратҡан һайын уларҙың ифрат эшлекле, шул уҡ ваҡытта йомарт, киң күңелле булыуҙарын күреп, йәмғиәтебеҙҙең ошо ҡатлам кешеләренә - байҙарға ҡарата тик яҡшы тойғоларым артҡандан-арта бара. Уларҙы ихтирам итеүгә башҡаларҙы ла өндәйем. Хәләл ефеттәре, бала-сағалары, башҡа туғандары менән берлектә ең һыҙғанып донъя көтөп, көнө-төнө арымай-талмай эшләп төҙөп алған хужалыҡтарының ҡәҙерен белгән, үҙ дәрәжәләре хаҡында ла онотмаған шундай ватандаштарым ауылдарҙа тағы ла күберәк булһын ине, тигән теләгем тыуа. Байҙар булһа, илдә аслыҡ та булмаҫ, иншалла. Икмәк, ит, һөт, йәшелсә һымаҡ көндәлек кәрәк булған аҙыҡ-түлек етештереү, ахырҙа, улар өҫтөнә йөкмәлә бит. Ауылда байҙар ни тиклем күберәк икән, шул тиклем кешеләргә, айырыуса ауыл йәштәренә эш проблемаһы ла хәл ителәсәк, тигән инаныуҙамын. Һуңғы осорҙар хөкүмәтебеҙ ҙә ошо юҫыҡта эшмәкәрлек алып бара башланы буғай. Уларҙың һәммә эшенә Аллаһы Тәғәлә уңышлыҡтар һәм еңеллектәр насип итһен, тип доға ҡылам.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

*✓ Ҡыпсаҡтар Ағиҙел йылғаһының уң яғы буйлап уның урта һәм үрге ағымы тарафтарынаса килеп етә, унан Дим йылғаһының түбәнге ағымы буйҙарындағы ерҙәрҙе, Ағиҙелдең һул яҡ ярын һәм Елем үҙәнен биләй.*



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ДАЛА УЛДАРЫ - ҠЫПСАҠТАР БЕҘ!



XIII-XIV быуаттарҙа ҡыпсаҡтар Урал алды территорияһының ғәйәт ҙур киңлектәрендә, Волга һәм Яйыҡ йылғалары арауығындағы далаларҙа күсенеп йөрөй. Йәйҙәрен уларҙың көтөүлектәре Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары араһындағы ерҙәрҙә була. Әммә монгол баҫҡынсылығы арҡаһында арта барған миграцион ҡыҫым уларҙы төньяҡҡа һәм көнсығышҡа табан күсеп китергә мәжбүр итә. Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған риүәйәттәрҙә ата-бабаларының Кинель йылғаһы үҙәненән, Туҡ һәм Соран йылғалары буйҙарынан, Һамар үренән әлеге йәшәгән ерҙәренә күсеп килеүҙәре хаҡында һөйләнелә.

Ҡыпсаҡтар Ағиҙел йылғаһының уң яғы буйлап уның урта һәм үрге ағымы тарафтарынаса килеп етә, унан Дим йылғаһының түбәнге ағымы буйҙарындағы ерҙәрҙе, Ағиҙелдең һул яҡ ярын һәм Елем үҙәнен биләй. Ҡыпсаҡтарҙың ҙур өлөшө Ыҡ бассейнына ыңғайлай. XVIII быуатҡа ҡараған документтарҙа Ыҡ һәм Сөн буйында "Сарыш-Ҡыпсаҡ олоҫо", ә Ағиҙел йылғаһының түбәнге ағымында, Камаға ҡойған еренә тиклем ике яры буйында "Гәрәй олоҫо" булыуы теркәлгән. Бөгөлмә ҡалҡыулығының көнсығышында, Асылыкүлгә яҡын ерҙәрҙә аслы-ҡыпсаҡтар йәшәй, Ыҡ йылғаһынан көнбайышҡараҡ төркмән-ҡыпсаҡтар биләмәләре була. Гәрәй-ҡыпсаҡтар Елем йылғаһы буйҙарында көн итә, унан көнсығышҡа, таулы зонаға күсенә. Ҡарағай-ҡыпсаҡтар тау араларындағы үҙәндәрҙе биләй. Ҡара ҡыпсаҡтар, сәнкем-, һыуын-, бошман-ҡыпсаҡтар Ағиҙел йылғаһының көньяҡ бөгөлөнән Һаҡмар йылғаһының түбәнге ағымы тарафтарына тиклем ерҙәрҙе биләй, XV-XVI быуаттарҙа Нөгөш йылғаһы буйлап төньяҡҡа йүнәлә, Оло Ыҡ йылғаһының һул ҡушылдыҡтары буйындағы урманлы ерҙәрҙә көн итә. XVI-XIX быуаттарҙа ҡарағай-ҡыпсаҡтар бөрйәндәр һәм түңгәүерҙәр менән бер ваҡытта Урал аръяғындағы ерҙәргә үтеп инә. XVII-XVIII быуаттарҙа, нуғайҙарҙың ошо ерҙәрҙән күсеп китеүе менән, ҡыпсаҡтар Һамар йылғаһының уң ҡушылдыҡтары, Оло һәм Кесе Үҙән йылғалары үҙәндәрендәге ерҙәрҙе биләй. XIX быуаттың икенсе яртыһында улар башҡа бер башҡорт ырыуҙары вәкилдәре менән Оло Ырғыҙ буйҙарына күсеп китә.

Хәҙерге ваҡытта ҡыпсаҡ ырыуы вариҫтары Башҡортостандың Күгәрсен, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Йылайыр, Ишембай, Белорет, Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил, Әлшәй, Мәләүез райондарында, Ырымбур, Һарытау һәм Һамар өлкәләренең байтаҡ ҡына башҡорт ауылдарында йәшәй.

Ҡыпсаҡ ырыуы генофондында R1a1-M198 гаплотөркөмө вәкилдәре өҫтөнлөк итә (54%). Шулай уҡ күп һанда булмаған башҡа гаплотөркөм кешеләре лә бар: N1b-P43 (6%), N1c1-M178 (6%), R1b-M73 (5%), R1b-M269 (3%), C-M130 (3%), E1b1-M35 (2%) һәм J2-M172 (2%). Был тикшеренеүҙәр ҡыпсаҡтарҙың ата-бабаларының төп өлөшө боронғо һинд-европа (һинд-иран) ҡәүемдәренән булып, I мең йыллыҡ урталарында Үҙәк Азия күскенселәре мөхитендә төркиләшеүен фараз итергә мөмкинлек бирә.

Ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары дөйөм башҡорт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, баҫҡынсыларға ҡаршы ҡыйыу көрәшә, ер һәм рух азатлығы өсөн күтәрелгән ихтилалдарҙа мөһим роль уйнай. Һыуын-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы Яманһары Япаров беренселәрҙән булып Пугачев лагерына килеп етә, ә Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы Кинйә Арыҫланов 1773-1775 йылдарҙа барған пугачевсылар хәрәкәтендә баш күтәргән башҡорттарҙың идеологы булып таныла. Поход старшинаһы Аҡмәмбәт Ураҙғолов етәкселегендә 9-сы башҡорт полкы яугирҙары рус армияһы составында Парижды алыуҙа ҡатнаша. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡыпсаҡ ырыуының аҫыл ир-егеттәре Ғәфиәтулла Арыҫланов, уның ауылдашы Сәлмән Биктимиров, Ҡара-Ҡужаҡ бей тоҡомо Морат Ҡужаҡов, Садыҡ Сайранов, Әбдерәүеф Дәүләтов, Зөбәй Үтәғоловтар Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

Башҡорт автономияһы өсөн барған милли хәрәкәт башында барыусылар араһында бер туған Ғабдулла һәм Хөрмәтулла Иҙелбаевтар була, ә башҡорттар араһынан тәүге композитор булып танылыу табасаҡ Ғәзиз Әлмөхәмәтов ҡыҙылдарға ҡаршы күтәрелгән Ҡыпсаҡ доброволецтары отрядын төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша. Совет Башҡортостаны тарихында Бәхтегәрәй Шәфиев һәм Шәһит Хоҙайбирҙиндар лайыҡлы урын биләй. Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов СССР тарҡалғандан һуң 20 йыл буйына Башҡортостан Республикаһының арҙаҡлы етәксеһе, уның Беренсе Президенты булды, Рәсәй етәкселеге хөрмәт иткән федераль кимәлдәге сәйәсмән булып танылды.

Республикабыҙҙа танылыу тапҡан байтаҡ ҡына хужалыҡ һәм дәүләт эшмәкәрҙәре, билдәле яҙыусылар, шағирҙар, ғалимдар, табиптар, сәнғәт әһелдәре, Башҡортостандың социаль-иҡтисади һәм рухи үҫешенә тос өлөш индерә алған арҙаҡлы шәхестәр ҡыпсаҡ ырыуы ауылдарында тыуып үҫкән. Билдәле башҡорт шағирҙары һәм яҙыусылары Ғабдулла Амантай, Баязит Бикбай, Рауил Бикбаев, Марат Кәримов, Гөлфиә Юнысова, Ноғоман Мусин, Динис Бүләков, Тамара Ғәниева, Сабир Шәрипов, Рәмил Йәнбәков, Ғәлим Хисамов, ғалимдар Мөхтәр Сәғитов, Зиннур Ураҡсин, Әхмәт Сөләймәнов, Ғәли Сәйетбатталов, Марат Зәйнуллин, Вәли Псәнчин, Марат Ҡолшәрипов, артистар Вәлиулла Мортазин, Ғиниәт Ушанов, Ғәшиә Абызгилдина, Тамара Хоҙайбирҙина, Муллаян Сөйәрғолов, Заһир Вәлитов, Римма Амангилдина, Минзәлә Хәйруллина, композитор Ғәзиз Дәүләтбирҙин, табиптар Венер Сәхәүетдинов, Марат Аҙнабаев, Сәлиә Мырҙабаева һәм башҡа арҙаҡлы ҡыпсаҡ ул-ҡыҙҙары менән ырыуҙаштары хаҡлы рәүештә ғорурлана.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 49-51-се һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Дивизияның тыуыуы

1941 йылдың 22 июне Ватаныбыҙ тарихына иң дәһшәтле һәм халыҡтарыбыҙ киләсәге өсөн үтә хәүефле булған көндәрҙең береһе булып инде. Беҙ әле лә уны Хәтер һәм матәм көнө, тип нарыҡлайбыҙ. Илебеҙ тарихында бығаса күрелмәгән үлемесле һуғыш башланған көн булды ул.

Ил етәкселегенең сәйәси хаталары, юғары кимәлдәге хәрби кадрҙарҙың репрессия ҡорбандарына әүерелдерелеүе, Ҡыҙыл Армияның тоталь һуғыш алып барыуға әҙер булмауы арҡаһында 1941 йылдың йәйе һәм көҙгө айҙары СССР-ҙы катастрофа сигенә алып килде. Туҡтауһыҙ барған алыштарҙа йөҙәр меңләгән совет һалдаты әсиргә алынды, миллионлаған кеше һуғышта һәләк булды. Дошман Мәскәүгә яҡынлашты. Был саҡта киләсәктә легендар башҡорт генералы булып таныласаҡ Миңлеғәли Шайморатов та үҙенең Беренсе айырым Кремль полкы менән генерал Доваторҙың 2-се кавалерия корпусы составында Волоколамск йүнәлешендә фашист баҫҡынсыларын йән аямай ҡыйрата ине.

Совет кешеләре үҙҙәренең өр-яңынан үҙгәртеп ҡоролған илен ярата ине, шуға ла бик күптәр һуғышҡа мотлаҡ мобилизация буйынса түгел, ә үҙ ихтыяры менән китте. Башҡорттар борон-борондан яугир халыҡ булып, Рәсәй алып барған һуғыштарҙа атлы ғәскәре менән ҡатнаша ине. Гитлерсылар Мәскәүгә етеп килгән иң хәтәр бер мәлдә Ҡыҙыл Армияның милли частарын булдырыу хаҡында СССР етәкселәренә кем тәү башлап мөрәжәғәт иткәндер, хәҙер асыҡлауы ҡыйын. Әммә башҡорт атлыларының адмирал Колчак армияһын ҡыйратыуҙа ҡатнашыуын, 1919 йылда генерал Юденич ғәскәрҙәренә ҡаршы тороп, Петроградты ҡурсалап ҡалыуын Иосиф Сталин да һис онотмағандыр. Шулай уҡ БАССР Совнаркомы һәм ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты етәкселәренең дә башҡорт халҡы исеменән ошо хаҡта Дәүләт Оборона Комитетына мөрәжәғәт итеүен фаразларға була.

1941 йылдың 13 ноябрендә СССР Дәүләт Оборона Комитеты Урта Азия республикаларында, Ҡаҙағстанда, Башҡортостанда, Ҡабарҙы-Балҡар һәм Чечен-Ингуш автономиялы республикаларында хеҙмәтсәндәрҙең, партия һәм совет органдарының һорауы буйынса милли ғәскәри соединениелар булдырыу хаҡында ҡарар ҡабул итә. Шул уҡ көндә Башҡортостанға И. Сталиндан ошондай телеграмма килә: "Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәренең теләген ҡабул итеп, Дәүләт Оборона Комитеты республика территорияһында тиҙ арала ике Башҡорт атлы дивизияһын формалаштырыуға рөхсәт бирә. Дивизияларҙың номерҙары: 112-се һәм 113-сө. Уңыш теләйбеҙ. ДОК рәйесе И. Сталин".

1942 йылдың яҙына илдә барлығы 20 милли атлы дивизия, 15 уҡсылар бригадаһы формалаша. Әммә фронтҡа үҙ номерҙары һәм исемдәре аҫтында уларҙың тик 4-һе генә ебәрелә: 110-сы Ҡалмыҡ, 112-се Башҡорт, 115-се Ҡабарҙы-Балҡар атлы дивизиялары һәм 255-се айырым Чечен-Ингуш атлы полкы. Башҡортостанда төҙөлгән 113-сө атлы дивизия ла айырым хәрби часть булып китмәй, уның һалдаттары һәм командирҙарынан 1800 кеше Туймазы станцияһында урынлашҡан 9-сы запас атлы полкына, 1000 кешегә яҡыны 112-се дивизияға өҫтәмә көс рәүешендә ебәрелә. Ошо милли хәрби частарҙы ойоштороу һәм тәьмин итеү тулыһынса республикалар иҫәбенә башҡарыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Мөхтәриәтте беҙгә большевиктар бүләк иткән кеүек килеп сыҡмаһын өсөн Башҡортостандың Рәсәй составында Үҙәк менән Килешеү нигеҙендә төҙөлгән берҙән-бер республика икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алыу мотлаҡ ине.*



# МӨҒЖИЗӘЛӘР ТЫУҘЫРЫУҒА

**Үтеп барған йылыбыҙ ниндәй киңәнестәр, һорауҙар, фекерҙәр йә үкенестәр тыуҙыра? Яңы йыл алдынан ошо юҫыҡтағы һорауҙарыбыҙҙы халҡыбыҙ зыялыларына төбәнек. Был юлы ситтән тороп диалогта танылған шағирә Таңһылыу Ҡарамышева, яҙыусы-шағир-журналист Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, Учалы районында йәшәгән шағирә Наилә Хамбалеева ҡатнашты һәм беҙҙең һорауҙарға яуаптарын юлланы.**

**Әйҙәгеҙ, үтеп барған йылдың һеҙҙең өсөн иң әһәмиәтле ваҡиғаларын барлауҙан башлайыҡ ҡоробоҙҙо.**

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Үтеп барған йылдың ваҡиғаларының ваҡиғаһы, әлбиттә, республикабыҙҙың 100 йыллыҡ юбилейын билдәләү. Әгәр ҙә 100 йыл элек милләтебеҙҙең аҫыл улдары ҡулдарына ҡорал алып, милли автономия өсөн көрәшмәгән булһа, Башҡортостан Республикаһы ла, илебеҙҙең башҡа республикалары ла, Рәсәй Федерацияһы ла булмаҫ ине. Был - аксиома.

**Таңһылыу Ҡарамышева:** "Киске Өфө" гәзитендә "Улар автономия яуланы" рубрикаһы аҫтында мөхтәриәт яулауҙа ҡатнашҡан тарихи шәхестәребеҙҙең ҙур исемлеге баҫылып сыҡты. Гәзиттең был һанын мин бик ҡиммәтле мәғлүмәт күреп үҙ архивымда ҡәҙерләп һаҡлайым. Исемлек бар, тимәк, был шәхестәрҙең исемдәре лә уларҙың тыуған төйәктәрендә һәм башҡа урындарҙа мәңгеләштерелеүен дауам итәсәк. Исемлек һаман да тарихсыларыбыҙҙың тырышлығы менән тулыландырыла бара, урындарҙа исем мәңгеләштереүҙәр дауам итә. Минең шәхсән үҙемә, мәҫәлән, Ишембай районы Маҡар ауылында Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, башҡорт дворяны Мөхәммәтйософ Ибраһим улы Ҡарамышевтың туранантура нәҫеле булған Мөхәммәтгәрәй Батыргәрәй улы Ҡарамышевҡа, уның бер туған ҡустыһы, мөхтәриәт яулау йылдарында 1-се Башҡорт атлы полкы командиры булған, Верхнеуральск фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы Әмир Ҡарамышевҡа таҡтаташ асыу тантаналарында ҡатнашыу бәхете тейҙе.

**Республикабыҙҙың бер быуатлыҡ юбилейы айҡанлы үткәрелгән саралар, асылған объекттар һеҙҙең һәм халҡыбыҙҙың таңһығын ҡандырырлыҡ булдымы? Тағы ниндәйерәк объекттар асылмай, ниндәй исемдәр мәңгеләштерелмәй ҡалды, тип уйлайһығыҙ?**

**Таңһылыу Ҡарамышева:** Ит күрмәгәнгә үпкә таңһыҡ, тигәндәй, таңһығыбыҙҙы бик ҡандырып етмәгән мәлдәр ҙә булмай ҡалмағандыр, әлбиттә. Беренсенән, ерле мөхтәриәттең әле 1917 йылдың 15 декабрендә үк иғлан ителеү факты рәсми рәүештә телгә алынмаһа. Был хаҡта тарихсыларыбыҙ һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре генә һүҙ әйтте. Асылда, беҙ мөхтәриәтебеҙҙе Үҙәк власть раҫлаған, йәғни таныған көнөн билдәләп үттек. Ә был үҙ сиратында мөхтәриәтте беҙгә әлеге лә баяғы большевиктар бүләк иткән кеүек килеп сыҡты. Улай килеп сыҡмаһын өсөн Башҡортостандың Рәсәй составында Үҙәк менән Килешеү нигеҙендә төҙөлгән берҙән-бер республика икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алыу мотлаҡ ине. Сөнки һәр төрлө Килешеүҙә ике яҡ ҡатнаша. Башҡортостан ягы ҡайҙан хасил булған? Большевиктар үҙҙәре менән үҙҙәре килешеү төҙөмәгән дә инде. Рәсәйҙәге ҡалған республикаларҙың береһенең дә бындай килешеүе юҡ. Сөнки улар өҫтән төшөрөлгән декреттар буйынса төҙөлгән. Асылмай ҡалған объекттарға килгәндә, баш ҡалабыҙҙа Башҡортостан автономияһына һәм ошо хәлгә бәйле рәүештә Рәсәй федерализмына нигеҙ һалыусы Әхмәтзәки Вәлидигә һәйкәл ҡуйылырға тейеш ине. Бындай күренеш илебеҙҙә һаманғаса милли сәйәсәт доктринаһының булмауынан киләләр тип уйлайым. Әгәр ҙә Федераль үҙәк хоҡуҡи демократик дәүләт төҙөргә теләй икән, унитарлыҡ идеяһынан асыҡтан-асыҡ баш тартырға, милли доктринаны булдырырға бурыслы. Халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғы ҡыҫырыҡланырға тейеш түгел.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Салауат батыр һәйкәленә барған юлда, Әхмәтзәки Вәлиди урамы башланған урында, Башҡортостан телерадиокомпанияһы алдында мәшһүр шағирыбыҙ, республикабыҙ өсөн йәнен фиҙа ҡылған Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл асылыуын беҙ күпме көттөк! Ә бит Бабич физик рәүештә үлтерелгәндән һуң тағы ла бик күп тапҡырҙар "үлтерелде", исеме тыйылды, китаптары юҡ ителде, әҫәрҙәре укыу әсбаптарынан алып ташланды. Шундай шағирға тап шул урында һәйкәл асылыуы мөмкин булмаған хәл ине. Әлбиттә, ошо ваҡиға ғына ла таңһыҡтарҙы мең ҡат ҡандырырлыҡ. Шул уҡ ваҡытта хаҡлы рәүештә Рәсәй Федерализмы атаһы тип танылған Әхмәтзәки Вәлидигә тап республиканың быуатлыҡ юбилейы барғанда иғтибарҙың аҙ бүленеүе шатландырмай, әлбиттә.

**Наилә Хамбалеева:** Яҡшынан, яҡтынан таңһыҡ ҡанамы икән? Айырыуса беҙҙең кеүек ауылдарҙа рух һаҡлап йәшәүселәрҙең. Барыһы өсөн дә әйтә алмайым, шәхсән үҙемә, сараларҙың уртаһында ҡайнап йәшәмәгән ауыл ҡатынына, бер сараға барып ҡына ҡайтыу ҙа әллә күпме көс бирә. Республикабыҙҙың юбилейы айҡанлы күп саралар уҙғарылды, әлбиттә. Һәр береһен ситтән булһа ла күҙәтеп барырға тырыштым. Яңылышмаһам, Республикабыҙҙың 100 йыллығын ҡаршылап, 100 объект асылырға планлаштырылғайны. Улар мәғариф, мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау, спорт һәм башҡа өлкәләрҙә, бөтә Башҡортостан буйынса төҙөлөргә тейеш ине. Ошо исемлектә Учалы үҙәк ҡала дауаханаһының хирургия корпусы ла барлыҡҡа килгән, бик ҡыуанғайным. Бөгөнгә көндә төҙөлөш ҡыҙыу темптар менән алып барыла. Уның тиҙерәк файҙаланылыуға тапшырылыуын көтәбеҙ.

**Бөгөн республикабыҙҙа халыҡтың йәшәйеш кимәлен яңы баҫҡысҡа күтәреү өсөн бик күп эшләнә. Беҙҙе яңы юлдар ҙа, яңы медпункттар, балалар баҡсалары асылыу ҙа, пассажирҙар автотранспорты эшенең яйға һалыныуы ла шатландыра. Әммә бөгөн халҡыбыҙҙы иң оло афәттән - эскелек һаҙлығынан ҡотҡарыу өсөн башланған саралар ныҕыраҡ хуплана һымаҡ. Әйткәндәй, Башҡортостан Башлығының, депутаттарҙың Яңы йыл байрамдары табынын алкоголле эсемлектәрһеҙ ҡоролға тигән саҡырыуына нисек ҡарайһығыҙ?**

**Таңһылыу Ҡарамышева:** Халыҡтың матди көнкүрешен, әлбиттә, яҡшыртырға кәрәк. Рухи аҙығын да хәстәрләргә кәрәк. Һәр хәлдә, республика бар икән, ул халыҡтың көнкүрешен тейешле кимәлдә тотоу өсөн ниндәй ҙә булһа төбәк кимәлендәге үҙаллылыҡҡа эйә булырға тейеш. Шуныңһыҙ, уның барса мәғәнәһе юҡҡа сыға. Йәғни, ниндәйҙер дәрәжәләге автономлылыҡһыҙ ниндәй ҙә булһа мәсьәләләрҙе хәл итеү мөмкинлеге юҡҡа сыға. Шул иҫәптән, ихтимал, халыҡтың йәшәйеш кимәлен яңы баҫҡысҡа күтәреү мөмкинлеге лә.

Эскелеккә ҡаршы көрәште айыҡ аҡыллы һәр кемебеҙ, шул иҫәптән мин дә, хуплайым ғына. Йәмәғәтселек тә, рәсми органдар ҙа был йүнәлештә уртаҡ маҡсат юлынан бара. Иң мөһиме, һөҙөмтә менән түгел, сәбәп менән көрәшергә ваҡыт. Эскелекте тыуҙырған сәбәптәрҙе юҡҡа сығарыу өсөн социаль проблемаларҙы хәл итергә кәрәк. Был бер көнлөк, ваҡытлы сара түгел. Алкоголле эсемлектәр һатыуҙан бюджет табыш ала бит, был килемдән ул баш тартмаясаҡ. Бар өмөт - халыҡтың үҙаңында, үҙенең сәләмәт тормош алып барырға теләүендә.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Мин хәҙер халҡыбыҙҙы "эскелек һаҙлығында" тип атамаҫ инем. Был хаҡта алда ла күп тапҡырҙар яҙғаным булды: айырым кешеләрҙең ошо сирҙән арына алмауына ҡарап ҡына "халыҡ эсә" тип әйтеү дошман һүҙе. Хоҙайға шөкөр, милләтебеҙ был афәттән ҡотола алды. Үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар: туйҙарҙа эсерергә кеше таба алмайҙар. Бигерәк тә милләтебеҙ йәштәре спиртлы эсемлеккә бөтөнләй битараф. Республика башлығының Яңы йыл табындарын эскелекһеҙ ҡаршылау хаҡында саҡырыуы һәр йәһәттән хуплауға лайыҡ. Әммә ошо саҡырыуға һәр ҡайһыбыҙҙың күңел, йөрәк саҡырыуы ҡушылырмы - бына шуныһы мөһим. Әйткәндәй, айырым көндәрҙә, шулай уҡ мәктәптәрҙә уҡыуҙар тамамланып, сығарылыш имтихандары башланғанда спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйыуҙың ике осо ла булыуы бар бит. Шуны ла иҫәбеҙҙән сығармаһаҡ ине. Алдан иҫкәртеү булғаҫ, эсергә яратыусылар, киреһенсә, араҡы-шарапты йәшникләп-йәшникләп запаслап алмаҫмы? Ә бит бына был мәсьәләне бер нисек тә контролдә тотоп булмаясаҡ. Шуға күрә лә мин бөтөнләй эсмәү яҡлы!

**Наилә Хамбалеева:** Эйе, республика Башлығы, депутаттар тарафынан күп кенә ыңғай ҡарарҙар ҡабул ителә. Тик ҡабул ителеү - бер, уның үтәлеүен талап итә белергә лә кәрәк. Урындарҙағы депутаттар, власть ысын мәғәнәһендә халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып эшләргә тейеш. Йәшерене юҡ бит инде, бүленгән аҡса елгә оса, осмағаны тейешенсә файҙаланылмай. Күп осраҡта исем өсөн башҡарыла. Мәҫәлән, матур, сынъяһау итеп ултыртып ҡуйған медпункттарҙа ауыл халҡын ҡыш көндәрендә ҡабул итерлек түгел. Ярҙам алырға килгән әбей, бабайҙар, өшөп, зарланып ҡайталар. Фәлән саҡрым юл эшләнде, тип отчет бирелә, ә ул юлдарҙан йөрөрлөк түгел. Кеше башындағы таш түшәп кителәр. Былмы халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыу? Һанай китһәң, күп инде бындай етешһеҙлектәр. Республика Башлығы һәр ауылға барып, ҡарарының үтәлешен тикшереп йөрөргә тейешме? Һәр етәксе үҙ урынында компетентлы, кешелекле булырға тейеш.

Эскегә килгәндә, эйе, был - афәт. Милләтебеҙҙе упҡын ситенә этәргән афәт. Аҫыл-аҫыл ирҙәрҙе, гөлдәй ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы шәүләгә, тере мәйеткә әйләндергән ҡәбәхәт ул эскелек. Һәр кем үҙ тамағына үҙе хужа тигән булабыҙ ҙа бит. Бер быуаттан ашыу ғүмерен имаһның үткән илебеҙҙе тиҙ арала ғына һауыҡтырып алып булырмы һуң? Юҡтыр. Бында эҙә менән "ҡойо ҡаҙығандай, бер туҡтауһыҙ, арымай-талмай эшләргә кәрәк. Рухты, иманды нығытырға кәрәк. Аллаға шөкөр, халҡыма иман ҡайтты. Бик күптәр тайпылды хәмерле юлдан. Ә беләһегеҙме, йәш быуын, 20-25 йәшлектәр, эскегә, наркотикка ынтылып бармай бит! Уларҙың рухи донъяһы байыраҡ. Йәштәр телде белмәй, ауылдарҙа ла урыҫса ғына һөйләшәләр, тип әйтәбеҙ. Эйе, шулай. Был да бошондора. Әммә ҡандары, мейеләре хәмер менән ағыуланмаған быуын ҡасан да булһа асылына, башҡортлоғона ҡайтыр тигән өмөт бар. Минең тыуған ауылым Наурыҙҙа бер йәҙә лә һул хәмер һатылмай. Бына тыңғыһыҙ хакимиәт башлығы Закир Ғадинан улы өлгәште. Тимәк, була бит шулай эшләп! Иҫерткес эсемлектә мин кибеттеке - һәйбәт, "һулы" - насар, тип айырмайым, әлбиттә. Хәмерҙең ниндәйе лә хәмер, ағыу. Шуға ла яңы указды хуплайым. Тик Радий Фәрит улының әйткәне үтәлһен ине: өйҙән һатыусыларҙы ла сикләргә кәрәк. Беҙҙең халыҡ һәр тыйыуҙы ла урап үтеү әмәлен табыусан бит.

**Әлбиттә, беҙҙе "йәшел йылан" арбауынан тыш, эшһеҙлек мәсьәләләре, шул арҡала ир-егеттәребеҙҙең Себер тарафтарына олағыуы ла бик борсой. Республика Башлығы бер мәл ул ир-егеттәрҙе республикаға ҡайтарыу тураһында һүҙ ҙә күтәргәйне. Беҙгә ошо мәсьәләнең шулай уҡ оло бер афәткә әйләнеүе тураһында ныҕыраҡ саң ҡағыу кәрәкмәйме икән?**

**Таңһылыу Ҡарамышева:** Яуап һорауҙың эсендә. Саң ҡағырға һунламаныҡмы, тип тә уйлап ҡуям. Эшһеҙлек мәсьәләләрен ауылдарҙың юҡҡа сығыу күренеше менән бәйләп ҡарайым мин. Себер тарафтарына, эре ҡалаларға күпләп кемдәр юллана? Ауыл кешеләре. Ир-ат ҡына түгел. Ҡатын-ҡыҙ ҙа. Тап улар сит илдәргә китеп ҡарттар ҡарай, Себергә юллана. Тиҙҙән ауыл бөтөнләй бот һонасаҡ һымаҡ булып китә. Был реаль хәүеф. Ауылды ҡотҡарыу өсөн уның таралған халҡын ҡайтанан йыйып алырға, йәшәү шарттарын тыуҙырырға, эш урындарын булдырырға кәрәк. Ә нисек? Бынан тиҫтә йылдар әүәле "Киске Өфө"лә мин иҡтисад фәндәре докторы, күренекле профессор Мазһар Иҫәнбаевтың тап ошо һорауға яуап биргән бик аҡыллы әңгәмәһен уҡығайым. Ғалим ауылдарҙы тергеҙеүҙең берҙән-бер юлын

***✓ Хәҙерге заманда Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда ауылды һаҡлап ҡалыу ул дәүләтте һаҡлауға тиң стратегик мәсьәлә. Ауыл илде туҡландырыусы урын ғына түгел, ул иң беренсе нәүбәттә демографик мәсьәләне хәл итеүсе урын.***

# ҺӘЛӘТЛЕ ХАЛЫҠ БУЛЫП ҠАЛАЙЫҠ!

уларҙа заманса күмәк хужалыҡтар ойоштороуҙа, халыҡҡа таратылып бирелгән пай ерҙәрендә пайсыларҙың бергәләп, күмәк көс булып эшләүендә, ер эшкәртеп, иген сәсеп кенә түгел, мал аҫрап, йылҡысылыҡ, бүтән төр малсылыҡ менән шөғөлләнеп, ҡымыҙ, һөт продукттары етештереүҙә, тире эшкәртеү һәм башҡа традицион һөнәрҙәребеҙҙе тергеҙеүҙә күрә. Һүҙ совет заманындағы хөкүмәт тарафынан төҙөлгән һәм бар тапҡанын план буйынса уға тапшырып торған колхоздарҙы тергеҙеү тураһында түгел, ә пайсыларҙың үҙ килемен үҙе файҙалана алырлыҡ ойошмалары тураһында ине. Агрохолдинг, агрокомплекстар, инвесторҙар йәлеп итеү хаҡында ла түгел ине ғалимдың әйткәндәре. Пайсы ерен бары үҙ районы пайсыларына ғына һата алһын, тип һыҙыҡ өҫтөнә алынғайны. Был башҡортто ерһеҙләндереүҙән ҡотҡарыу өсөн кәрәк булған аҙым тиелгәйне. Үҙ пайын эшкәртә алмаусыларға күмәк хужалыҡ килеменән өлөш сығарылырға тейешлеге тураһында әйтелгәйне. Был пландарҙы район етәкселәре тормошҡа ашырһа, үҙе бер революцион еңеү булыр ине лә бит!

кешеләр ҙә эшҡыуар була алмай, шуға күрә бында тик дәүләт кимәлендәге саралар ғына мәсьәләне тамырынан үҙгәртергә мөмкинлек бирәсәк. Киреһенсә булған осраҡта ауылдарыбыҙҙан, ҡалаларыбыҙҙан киткән йәштәр менән бергә милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың киләсәге лә китәсәк беҙҙән.

**Наилә Хамбалеева:** Беләһегеҙме, был проблема буйынса минең үҙ ҡарашым бар. Проблема бар, әлбиттә. Ирҙәр менән бер рәттән ҡатын-ҡыҙҙарҙың Себер юлланыуы күңелде өйкәй. Тик был ул хәтлем дә афәт кимәлендә түгелдер тип уйлайым. Себерҙәрҙә, башлы-

**Быйыл 31 майҙа РФ Хөкүмәте тарафынан "2020-2025 йылдарға ауыл биләмәләре үҫешенең комплекслы дәүләт программаһы тураһында" ҡарарға ҡул ҡуйылды. Был документта рәсәйҙәрҙең дөйөм һаны иҫәбендә ауыл халҡы өлөшөн 25 процент кимәлендә һаҡлап ҡалыу, бының өсөн ауыл халҡының мәшғүллеген тәьмин итеү, инженер һәм транспорт инфраструктураһын үҫтереү кеүек мәсьәләләр менән бер рәттән, ауыл биләмәләрен төҙөкләндереү, уға заманса төҫ биреү бурысы ла ҡуйылды. Әйткәндәй, киләһе 2020 йылдың Башҡортостан Башлығы**

тә һаҡлап ҡалыу тураһында һүҙ бара. Бының өсөн, әлбиттә, ауыл кешеһенә бурыстар йөкмәтелерҙән алда уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн ниндәйҙер хоҡуҡи нигеҙ тыуҙырылырға тейеш. Хоҡуҡтарһыҙ беҙ бер кем дә түгел. Мәшғүллек өсөн база кәрәк бит әле. Ауыл кешеһе һеҙ әйткән инфраструктура менән файҙалана алһын өсөн башта халыҡты ауылдарға йыйнарға, ташлап китергә мәжбүр итмәҫлек шарттар тыуҙырырға кәрәк.

Мин ғалим түгел, шуға күрә үҙ исемемдән ауылды һаҡлау буйынса нимәләр эшләргә кәрәклеге хаҡында теҙеп бәйән итә алмайым, белгестәр



**Наилә Хамбалеева:** Ауылдар бөтөүгә табан барыуының ниндәй ҙур проблема икәненә, хөкүмәт, ниһәйәт, төшөндө тип ҡыуанырға ҡала. Программала эҙмә-эҙлекле саралар яҡтыртылған. Сөнки ауылдарҙы һаҡлап алып ҡалыу өсөн иң тәү сиратта эш урындары булдырылырға тейеш. Ә был үҙ сиратында ауыл хужалығына йөҙ менән боролоуҙы талап итә. Тарҡалған колхоз-совхоздарҙы әүәлге кимәлгә еткереп тергеҙеп булмаҫтыр инде. Әле яҙа-йоҙа, мең бәлә менән көн күргән фермер хужалыҡтарына, бәләкәй эшҡыуарҙарға реаль ярҙам күләмдәре арттырыу зарур. Үҙебеҙҙеке үҙебеҙгә тигән лозунг менән йәшәһәк, насармы ни? Нишләп беҙ шикле составлы сит ил аҙығы менән туҡланырға тейешбеҙ? Кешегә көн итерлек ризыҡтарҙың һәммәһе лә бар бит беҙҙә. Халыҡ бөгөн әүҙем генә булып, хәләл ризыҡҡа күсә. Хәләл баҙарҙар артһын ине. Шөкөр, оптимизация тигән насар нәмә туҡтауға табан барған һымаҡ. Халыҡтың күпләп ҡалаға күсеүенең сәбәпсеһе шул күренеш тә булды бит. Һәр кем балаһының бөгөнгөһөн, киләсәген уйлап йәшәй. Башланғыс мәктәпле йәки бөтөнләй мәктәпһеҙ, балалар баҡсаһыҙ ауылдарҙа йәштәрҙе төпләндереү мөмкин түгел. Социаль инфраструктура ла үҫешергә тейеш.

Сөнки бик тиҙҙән ситтәр ҡулына күсеп бөткән ерҙәребеҙҙе кире ҡайтарып ала алмаясаҡбыҙ. Сит төбәктәрҙә төйәк тапҡан милләттәштәребеҙ өсөн милли-мәҙәни автономиялар төҙөү генә беҙҙең милләттәштәребеҙҙе үҙ республикаһы өсөн юғалыуҙан һаҡлап ҡала алмаҫ ул. Ситтә төпләнеү үҙе үк илһеҙлек бит.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Беҙҙекеләр ситкә өйрәнеп тә бөттө шикелле. Ошо урында совет осорондағы бер күҙәтеүем менән бүлешеп үтәйем. Мәҫәлән, әрмәндәр шул ваҡытта уҡ үҙҙәрендә эш булмауы сәбәпле бөтә ил буйынса төркөм-төркөм таралып эшләне. Беҙҙең ауылдарға ла килеп фермаларға һарайҙар, күперҙәр төҙөй торғайнылар. Белергә ине: уларҙың шулай йөрөүенән әрмән милләте рухиәте ниндәй кимәлдә зыян күрҙе икән? Ә беҙҙең йәштәребеҙ Себер, Мәскәү, Ҡаҙан тарафтарына ғаиләләре менән күсеп китә лә, уларҙың балалары милләтебеҙ өсөн "юғалып" ҡала. Минеңсә, беҙгә был йәһәттән сан ҡағыуҙан бигерәк, йүнәлешле дәүләт программалары ҡабул итеп эш итеү кәрәк. Ярар, ситкә киткәндәрҙең йөрәгенә үтерлек итеп әйттек тә, улар ҡайтты ла икән ти. Ә бит эш урыны булмаҡас, улар барыбер кире китәсәк. Барлыҡ-

са, ауыл халҡы йөрөй. Бына бер мәсьәлә сисеп ҡарайыҡ. Ауылда мал тотҡан 150 йорт бар икән, ти. Һәр береһендә 3-әр баш мал. 450 баш мал май башынан көтөүгә сығырға тейеш. Апрель аҙаҡтарында халыҡты сходҡа йыйып, ошо мәсьәлә күтәрелә. Бер кем дә, эшһеҙ ятҡан бер ир заты ла был эшкә риза түгел. Эйе, көтөү эше еңел түгел. Ҡойон ямғырҙарын да, йәшенен дә, томра эҫеһен дә малыңдан күҙ яҙлыҡтырмай үткәрергә кәрәк. Хәҙер аҡсаһын һанап ҡарайыҡ. Мал башына 180 һум менән түләү һалғанда ла, көтөүсе айына 81 мең һум аҡса эшләй ала. Көтөү сезонын биш ай итеп алғанда, 405 мең килем алыр ине ул. Ул аҡсаға ҡышын ғаиләңде аҫрарға була. Был, әлбиттә, дөйөм эшһеҙлек проблемаһын хәл итмәйәсәк. Шулай ҙа Себерҙә бер ай эшләп, алып ҡайтҡан аҡсаһын эсеп бөтөп киткәндәр ҙә аҙым һайын. Ғаиләһе түҙә, түҙмәгәне тарҡала. Бына был афәт. Ауылдарҙа эш бар ул эшләйемтешләйем тигән йүнселдәргә. Бына беҙҙең ауылда яҙ еттеме, оҫталарға сират теҙелә. Ҡулы оҫта ирҙәр бура бурарға, ремонт, ағас эштәренә ялланып, район буйлап сығып китәләр. Яҡшы аҡса эшләп алалар. Ә эскәне замананы һүгеп, эсеп көн үткәрә...

**Радий Хәбиров указы менән "Тораҡ пункттар эстетикаһы" йылы тип иғлан ителеүе лә осраҡлы түгел. Был мәсьәләне бойомға ашырыуҙы нисек күҙаллайһығыҙ һәм ошо йәһәттән һәр ауыл кешеһенә ниндәй бурыстар йөкмәтелә тип уйлайһығыҙ?**

**Таңһылыу Ҡарамышева:** Ысынлап та, әле 1959 йылда Рәсәйҙә ауыл халҡы 52 процент тәшкил иткән булһа, хәҙер 25 процент. Йәғни 25 процент ҡына халыҡ ауылда йәшәй һәм үҙен-үҙе генә түгел, ҡаланы ла ашата. Ауыл аҙыҡ етештереүҙән туҡтаһа, илебеҙҙе яһалма ит, йомортҡа һ.б. ризыҡтар баҫып алыуға ла күп ҡалмаҫ. Әле үк был процесс бара. Һөт составында - һөт, иттә ит проценты кәмей бара. Магазин кәштәләренән нимә һатып алып ашағаныңды белеүе ауырлаша. Нормаль кеше ауылда йәшәргә һәм саф һауа һуларға, экологик яҡтан таҙа ризыҡ ашарға, бала-сағаһы аллергия, диатез кеүек ауырыуҙарҙан яфаланмаҫҡа, үҙ йортоноң баҙында аҙыҡ запасы тупларға тейеш. Ләкин бар ҡиммәттәрҙе матди байлыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырған илдә аяныс хәл килеп тыуҙы: ауылдарҙа халыҡ һаны кәмене. Һеҙ телгә алған ҡарарҙа әлеге кимәлде генә булһа ла нисек

фекеренә мохтажмын. Төҙөк ауылдар мәсьәләһенә килгәндә, уның эстетик яғын да үҙ эсенә алған конкурстар быйыл уҡ үткәрелде, беренсе урынды Учалы районы Наурыҙ, икенсе урынды Ишембайҙан минең ҡәҙерле маҡарҙарым яуланы. Бик матур акция булды. Үрҙә һеҙ әйткән башланғыстарҙы хуплауымды белдерәм.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Был йәһәттән шуны ғына әйтә алам: хәҙерге заманда Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда ауылды һаҡлап ҡалыу ул дәүләтте һаҡлауға тиң стратегик мәсьәлә. Ни өсөн тигәндә, ауыл илде туҡландырыусы һәм туйындырыусы урын ғына түгел, ул иң беренсе нәүбәттә демографик мәсьәләне хәл итеүсе урын. Ауылһыҙ Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың киләсәге юҡ. Дәүләтебеҙ шуға күрә лә үҙен һаҡлап ҡалырға теләгән өсөн дә ауылға ярҙам итергә, уны дотацияларға бурыслы. Мин, мәҫәлән, Ҡытайҙағы һымаҡ, ауыл хужалығын һалымдан бөтөнләй азат итеү яҡлы. Әгәр ҙә ошо хәл закон менән нығытылһа, ҡалала йәшәүселәр эшелон-эшелон булып ауылдарға ағыласаҡ һәм ауыл хужалығы көтөлмәгән үҫеш кисерәсәк, балалар ҙа эшелон-эшелон булып донъяға киләсәк.

Тиҫтә йыл самаһы элек кенә әле ауыл халҡы ҡалаларға коммуналь уңайлыҡтары өсөн юллана ине. Утын әҙерләп, урам ҡойоһонан күнәк-күнәк һыу ташыуҙан биҙгәндәр уңайы сығыу менән ҡала кешеһенә әйләнде. Ә хәҙер бит хәлдәр ҡырҡа үҙгәрҙе. Һәр бер йорт ихатаһында үҙ ҡойоһо. Улай ғына ла түгел, өйөндә үк йылы һыуы, ваннаһы. Күпселек ауылдарға газ һуҙылған. Шуныһына өҫтәп, өй өҫтөндә эше булһа, балаларына йылы мәктәп, йырлап-бейергә клубы, медпункт булһа, ауылда ла артым булыр. Ышанайыҡ.

"Тораҡ пункттар эстетикаһы" йылы итеп иғлан ителеү бик яҡшы, әлбиттә. Ауылдарыбыҙ ҙа йәмләнеп, төҫ кереп ҡалыр. Башҡа райондарҙа нисектер, беҙҙең Учалыла йыл һайын "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", йә шәжәрә байрамдары үтеп тора. Төп маҡсат ситтә йәшәгән ауылдаштар менән осрашыу булһа ла, ана шул ауылдарҙы төҙөкләндереп ҡалыу өсөн ул. Емерек ихаталар яңыртыла, буяла. Халыҡ бер күтәрелеп ала. Киләһе йыл ағымы ла шул юҫыҡта барыр тип уйлайым. Һәр бер кеше иң башта үҙ йортон тәртиптә тотһа ғына дөйөм һүрәт матур буласаҡ. Был - хәҡиҡәт.

**(Дауамы 11-се биттә).**




Кәләшен Ҡырҡтытау аша алып ҡайтырға булып ылауҙан төшөп ҡалды Ҡазыхан. Беренсе арбала дилбегә тотоп ултырған атаһы Баҙамша ла, уның артында бәүелеп ойоп килгән әсәһе Ғәйниә лә күрмәмешкә һалышты. Бары икенсе арбалағы ағаһы Байтулла менән еңгәһе Йәүһәриә генә мәғәнәле ҡарашып алдылар ҙа, еңгәһе күҙҙәрен күлдәрөп шыбырланы:

- Ҡәйнеш, бынау кейеҙҙе ал, инде килен йомшайым тигәнемдә генә апһыныңды өшөтөп ҡуярһың юҡһа. - Үҙе өсөнсө арбалағы тағы бер килендәшенә ҡарап ҡаш һикертте. Тегеһе лә әллә нимә тип төрттөрөр ине инде, алда барған ҡайны-ҡәйнәнән тартынып, телен тешләне.

Ҡазыхан төрөп бәйләнгән кейеҙҙе ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырҙы ла, еңгәһенә әйтер яуабы ыҫҡынырға ғына торһа ла, өндәшмәй боролоп китте. Ул бисуралар менән әйтешергә лә булыр ине, әле уны ситкәрәк китеп баҫып торған кәләше көтә. Егет бер ҡулына аҙыҡ-түлекле тоғон, кейеҙен тотһа, икенсеһе менән оялышынан башындағы ҡыҙыл яулығы төҫөнә ингән Шәмсиҡәмәрен етәкләп, туралап урманға ыңғайланы. Еңгәһе терһәк осон арҡалаш ултырған иренең бөйөрөнә төртөп, пырхылдап ауыҙын ҡаплаған булды. Байтулла асыуһыҙ ғына мығырҙаны:

- Йә, һайыҫҡан ягың сыҡмаһын...

Йәштәр етәкләшкән килеш урман юлы буйлап атланы ла атланы. Ялан яғынан алып ҡайтып килгән ҡатынына үҙ төйәгенең матурлығын, тауҙар мөһабәтлеген, урмандар ҡалынлығын күрһәткеһе килә ине йәш ирҙең. Никах төнөндә серләшеп ятҡанда, юлда төшөп ҡалып урманда ҡунып ҡайтырбыҙ, усаҡ яғып ултырырбыҙ, төнгө ҡоштар, таңғы һандуғас тауышын ишетерермен, тип вәғәҙәләгәйне. Урман күргәне булмаған кәләше былаҙы ишеткәс: "Уй, мин ҡурҡам да ул, беҙҙе айыу ашап ҡуйһа", - тип көлдөргәйне. Ҡазыхан яуап итеп: "Мин булғанда бер нәмәнән дә ҡурҡма",- тип тынысландырғайны. Өс тәүлек буйы ҡунаҡлашыуҙан арып, ашау-эсеүҙән бүгеп ҡайтырға сыҡҡан кейәү яғы, дала саңынан йонсоп, үҙ ерҙәренең ағаслы-һыулы яғына сыҡҡас, терелеп киткәндәй булды. Һәр кемгә туған яғы ғәзиз дә инде! Бына ошо һөйөклө төйәге менән кәләшен дә таныштырмаҡсы Ҡазыхан.

Ҡырҡтытау башына үрмәләп еткәндәрендә көн һарҡыуға ауышҡайны инде. Был урындарҙы Ҡазыхан яҡшы белә, һәр үҙәге, һәр убаһы таныш, йәй ҙә, ҡыш та һунар итеп, ағас ҡырҡып, емеш-еләк тиреп йөрөп үҫкән. Йыуан ҡарағай төбөндәге йомшаҡ мүккә кейеҙен түшәне лә, кәләшенә "Мин ошо тирәлә генә йөрөп әйләнәм, һин ял итә тор" тип тауҙың асыҡ яғына ҡарай ыңғайланы. Ҡаялы, ҡырҡма ташлы текә урындарҙа ҡыр кәзәләре була торғайны. Көтөүҙәре менән ҡайһы тәңгәлдәрәк йөрөрҙәрен дә белә. Хәҙер йәй аҙағы-көҙ башы, кәзә бәрәстәренең ярайһы ҙурайып, һимереп, моңһоҙ булып таштар араһында ҡыҙынып ятҡан мәле. Һиҙҙермәй генә барып сыҡҡанда, икешәр-өсәрен ҡороҡлап ала торғайнылар.

Өҫтән ҡыҙырып ҡарап бара торғас, ҡолағына бәрәс тазылдағаны салынды ла, егет таштар араһынан боҫоп ҡына аҫҡа шыуышты. Күп тә үтмәй кәзәләр өҫтөнә барып та сыҡты. Һәр ҡыштырлауға һаҡ булып өйрәнгән өркәк ҡырағай мал да аңғарҙы уны. Берәүһенең тертләп һикереп китеүенән башҡалары ут ҡапҡандай булып сит-яҡҡа һибелде. Тик Ҡазыхан да был һунарҙа тәүге тапҡыр түгел. Быңдай эштә бөтә көтөүгә түгел, ә ҡорбан итеп һайлағанға ғына һөжүм итергә кәрәкте белә. Баштан күҙе төшкән ҙур булмаған йоморо йәш кәзәгә генә төбәлде лә, айын тура килтереп, урап тотҡан сүс арҡанын ырғытты. Ҡороҡ һыҙғырып барып тоҫҡалғандың муйынына кейелде лә, унаһы елеп барған ыңғайы ҡапыл тартыуҙан артҡа саңҡайып барып та төштө. Һунарсы еп осон ыҫҡындырмаҫтан, ике һикереүҙә кәзә янында булды, шул ыңғайы уҡ итек ҡуныһынан һурып алған хәнйәр осо менән эйәк аҫтын һыҙып та ебәрҙе. Ҡороҡҡа эләгеп тулаған мал хаяһыҙ һикереп муйынын һындыра ла, мыштырлап торғанда йән биреп тә ҡуя торған. Шулай булмаһын өсөн уны йәһәт кенә салып алыу зарур. Кейектең аҙыраҡ ҡанын һарҡыткас, тояҡтарын ҡуша тотоп күтәреп, урман төбөндәрәк булған үҙәк шишмәһенә юлланды. Унда йәһәтләп тиреһен һыҙырып, эс-ҡарынын ҡутарып сығарғас, ит түшкәһен, хәнйәрен, ҡул-битен сайып, туҡтаған урындарын тоҫмаллап китте.

Шәмсиҡәмәрҙә ял ҡайғыһы юҡ, ул кейәүе киткәндән алып күҙ ҙә йоммай тирә-яҡты күҙәтә. Ана, ҡарағайҙан тубырсыҡ төштө. Уның артынса тағы. "Йәлп" итеп ҡарауына аҫта ғына йөрөгән ике тейен балаһы өҫкә ҡасты. Ҡатын ире киткән яҡҡа ҡарай йүгермәк булып ырғып торҙо ла, аҙыраҡ тапанғас, был ҡылығынан үҙе оялыпмы, кире сүгәләп, урынына ныҒыраҡ һеңде. Башын яурыны эсенәрәк йәшерҙе. "Тейендән ҡурҡып тормайым инде", тип үҙен дәртләндереп маташыуы ла бушҡа булды, эргә-тирә шырлыҡтан һарҡып сыҡҡан шомло тынлыҡ уның йөрәген ялмағандан ялманы. Шулай хәтһеҙ ваҡыт үткәндәй булды. Үҙ-үҙен йәлләүҙән, ҡурҡыуҙан күҙҙәренә тулған тынлауһыҙ йәштәре сикәләре буйлап йүгерешә башлағайны ғына, күңелле һыҙғырып килгән Ҡазыхан күренде. Яҫы япраҡтарға төрөлгән кәзә түшкәһен кәләше алдына алып килеп һалды егет:

- Бына, Ҡәмәр, һыйлайым һине хәҙер... - шунда ғына уның йөҙөнә күтәрелеп ҡараны. - Нимә булып китте?

Шәмсиҡәмәр илағанын һиҙҙермәҫкә булып сереште:

- Булманы...

- Илағанһың түгелме? Йәштәрең ялтырап тора, - янына сүгәләп, бармаҡ һырты менән ҡатынының битен һыпырҙы ир.

- Иламаным... Ҡурҡтым аҙыраҡ, - хәҙер инде үҙ хәбәренән үҙенең көлкөһө килде ҡатындың. - Йәштәрем үҙҙәре аҡтылар.

-Эй, ҡуяным минең, - Ҡазыхан кәләшенең башын күкрәгенә ҡыҫты. Рәхәтләнеп көлөштөләр. - Өйрәнерһең яйлап урманға ла, хәҙер был һинең дә төйәгең, беҙҙең балаларҙың тыуған иле буласаҡ.

Бәхетле төн булды был. Башҡа төндәрҙән айырмалы рәүештә үтә лә бәхетле. Яңы ғына ҡауышҡан ир менән ҡатындың икәүҙән-икәү ҡалған, тәүге тапҡыр шулай үҙ-ара ғына аулаҡта булған, иркен һөйләшә, ҡыҫҡырышып көлөшә, йүгерешеп шаярыша алған, берәүҙән дә тартынмаған һәм һаҡланмаған илаһи мәле булды. Ир соҡор ҡаҙып, кәзә түшкәһен япраҡҡа төрөлгән килеш шунда һалды ла, өҫтөнә таш түшәп, усаҡ тоҡандырҙы. Утҡа текәлеп һыйынышып ултырған, әллә ни хәтирәләр барлап һөйләшкән-серләшкән арала түбәлә йондоҙҙар тоҡанып, ҡыйырсыҡ ай ҡырын төшөп тә ятты. Усаҡты һүрелтеп, икенсе урынға күсергәс, баяғы соҡорҙан ауыҙ һыуын ағыҙырлыҡ татлы еҫ таралды. Йәш кәзә ите ылыйырып ҡына бешеп сыҡҡайны. Киҫәкләп турап, шулай уҡ быҡҡан япраҡҡа төрөп ашанылар, тоҡтан тире турһыҡ менән ҡымыҙ ҙа табылды. Бербереһенә иркә-шаян ҡараштарын аталата, буяла-майлана, көлә-шаяра тамаҡ туйҙырғас, ризыҡтарын ҡаплап, баяғы кейеҙ өҫтөнә ауҙылар. Бейек ҡарағайҙар осона ябылған сыбар йыһанға төбәлеп, йондоҙҙар атылғанын күҙәттеләр. Унан Ҡазыхан ынтылып кәләшен ҡосаҡлап алды, толом төбөн, муйынын еҫкәне, ирендәренә көмөш алҡаның сулпылары эләкте, уларҙы һаҡ ҡына ыҫҡындырҙы...

Иртәнсәк, ҡояш ҡалҡыуға, ауылға төшә торған тау һуҡмағы осонда торалар ине. Аҫта, йылға ярын ҡыҙырып, эреле-ваҡлы өйҙәр теҙелешкән. Тышҡы усаҡтарҙан төтөн күтәрелә, иңәләренән айырылып ҡалған быҙау-ҡоландар сыңғыраша, нөктә генә булып күренгән кешеләр ҡымырйыша. Ҡазыхан ят ерлеккә ҡурҡып та, ҡыҙыҡһынып та күҙҙәрен киң асып төбәлгән кәләшенең яурынынан ҡосаҡлап үҙенә тарта:

- Ааана, беҙҙең ауыл! Аааана-а, зыярат. Оҙон ғүмер йәшәп ҡартайғас, бөтөн инәй-олатайҙарыбыҙ кеүек беҙ ҙә шунда ятасаҡбыҙ.

"Иншаллаh" тип ҡабатлай ҡатындың ирендәре. Шул ваҡыт алдан төшөп барған ир артына ҡайырылып-ҡайырылып шуҡ йылмая:

- Йүгерәбеҙме?

Ҡатыны бер мәлгә генә баҙнатһыҙланғандай итә лә шаярыуҙы күтәреп ала:

- Йүгерәбеҙ!

Йәштәр тар һуҡмаҡтан аҫҡа йомола:

- А-а-а! Тот мине! Ҡазыха-а-ан!

- Ҡалма минән! Эһе-һе-ей!

* * *

Ошо йортта тағы ғауға сыҡты. Ире менән уландары араһындағы һуңғы ваҡыт ҡапыл ҡубып китә торған сыйыштарҙан арып бөткән Ғәйниә ялбарыулы ҡарашын өлкән улына күсерҙе. Барыһына ла ҡарағанда тыйнағыраҡ, тотанаҡлыраҡ булған ошо Байтуллаһына ғына өмөт. Тик ул да бөгөн ярайһы ҡыҙған һәм әсәһенең ҡарашына артыҡ ыжламай ине. Иренең ярһыуы саманан ашып, балаларын туҙҙырып ҡыуып сығарырынан ҡурҡҡан ҡатын көлдөксә артына йәшеренә биреберәк бәләкәй улына йоҙроҡ төйнөп күрһәтеп тә алды. Шуныһы хаттин аша бит уның! Мыйығы яңы сыға башлаған тимәҫһең, һаҡалы ағарған атаһына аҡыл өйрәтеп, яныпсәбәләнеп, хатта ки тауышын күтәрә биреп ебәрә. Теге мәл уҡлау менән кәгеп ебәргәне аҙ булған икән Ғәйниәнең, ныҒыраҡ тамыҙырға булған. Ана-ана, һаман ҡуймай!

- Уларҙың билдәләнгән ере бар, шунан сыҡмаһындар! Йүрүҙән иңендәге нисә дисәтинә алпауытҡа китте, Ҡырҡтытау һыртына етеп киләләр! Кесе убаға ла сиркәү күтәреү өсөн ағас һөйрәтәләр тиҙәр!

- Һин, башһыҙ малай, һыбай барып көжгөп йөрөгәндән генә ул сама көстө тыйып була икән тиһеңме? Унда бит кәлгә эсендә тотош бер гәскәр тора. Мин һиңә нисәнсе ҡат иҫкәртәм? Балапан! Һуңғыһы булды был!

- Кәлгә ерен ике йыл рәттән ҙурайталар! Староста ла, мулла ла, һинең кеүектәр... барығыҙ ҙа күҙ йомдоғоҙ! Һеҙ ҡурҡһағыҙ, беҙ барабыҙ! - Балапан илар сиккә етеп ҡыҙарып-бүртенгән, йоҡа кәүҙәһе дереләп-ҡалтырап тора.

- Барығыҙ әйҙә! Бар! Атаңды килеп әпкитерҙәр!

Был һүҙҙәрҙән Ғәйниә тертләп китте:

- Ай, Алла...

Байтулла тағы арағa төштө:

- Балапан! Етәр, шым! Әҙәмсә һөйләшәйек әле... - атаһына боролоп үтенде. -Атай... әйҙә һин дә ултыр... баҫыл әле аҙыраҡ?

Баҙамша кинйәһенә бер яндыра ҡарап алды ла, үҙ йөшенә һәм дәү кәүҙәһенә хас булмаған етеҙлек менән урындыҡҡа менеп, аяҡ салып ултырҙы. Иренең яйға килерҙәй икәнен төшөнгән Ғәйниә лә йүгермәләп килә һалып етте. Йәһәтләп, ашъяулыҡ йәйҙе, бая уҡ килене менән ҡыҙы әҙерләй башлаған да, ирҙәр һүҙ көрәштереүгә күскәс сығып шылғандан тороп ҡалған аҙыҡ-түлекте шунда ташыны. Уртаға итле ҡоштабаҡты ҡуйҙы ла, һаҡ ҡына итеп бабайына ҡарай шыуҙырҙы. Уныһы һауытты тартып алып, киҫәктәргә бүлгеләй башлағас, тамам еңел һулап, ишеккә ҡысып һөрәнде:

- Килен! Еҙекәй! Ҡайҙаһығыҙ шул?

Береһе тәҙрә яҡтауына терәлеп торған, икенсеһе ишек тәңгәлендәге тәпәш һәндерәлә баш баҫып ултырған Ҡазыхан менән Дәүләтҡол да, бәхәсте баҫып ҡуйған Байтулла ла, хатта һаман тынысланa алмаған Балапан да, аталарының баш күтәреп бер ҡарауынан табынға саҡырыу икәнен аңлап, ашъяулыҡ тирәләп урынлаштылар. Шул арала күңеле булып өлгөргән әсә, уландарының төп йортта бер урындыҡ булып йыйылыу бәхетенәнме, әллә саҡ ҡубып китмәгән ғауғаның хәйерле баҫылыу шатлығынанмы, ирекһеҙҙән һарҡып сыҡҡан йәштәрен һөртөкләп, эргәһендә ҡымырйышҡан ҡатын-ҡыҙға күрһәтмә бирҙе:

- Ҡайныңа тоҙлоҡтораҡ ит. Күп һалма, ҡоротто ҡутара һалып аштырып ҙа, тағы асыуҙаныр. Һин, Еҙекәй, ана, ағаңдың арҡаһына яҫтыҡ ырғыт, ҡатыға һөйкәлеп ултырмаһын. Унан, бар, баҙҙан һөт төшә һалып ал.

Ирҙәр хужаның "Бисмиллаһи үә ғәләә бәрәкәтилләһи" тигәненән һуң дәррәү тотоноп, һәүетемсә генә ашап алды. Һурпа менән йомшаҡ ит, үлән сәйе менән сөсө ҡорот уларҙың баяғы ҡыҙғыуын баҫа төштө. Унан тағы, астың асыуы яман тигәндәй, табын артындағы туҡ халыҡтың һөйләшеүе бөтөнләй икенсе була бит. Бушҡа килендәренә ирҙәрегеҙҙе башта ғарҡ иткәнсе туйындырып алығыҙ, унан ғына хәбәр һөйләгеҙ, тип өйрәтәме Ғәйниә. Үҙ картының холҡонан, ошо йәшәлгән ғүмер тәжрибәһенән алып әйтә лә һуң.

- Был арала килерҙәр инде, старшина ла шулай тип тора. Һин, Балапан, юҡбар менән булып йөрөгәнсе, ағаңдың донъяһында ярҙамлаш. Кем белә әле йәрәбәлә нимә сығырын?

**(Дауамы бар).**

СИТТӘН ТОРОП ДИАЛОГ

# МӨҒЖИЗӘЛӘР ТЫУҘЫРЫУҒА ҺӘЛӘТЛЕ ХАЛЫҠ БУЛЫП ҠАЛАЙЫҠ!

(Башы 8-9-сы биттә).

**Бер генә һөҙөмтәле эш тә рухи нигеҙһеҙ, рухи күтәренкелектән тыш эшләнмәй. Беҙҙе үҙ донъяларыбыҙҙы үҙебеҙ ҡорорға, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрергә, шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙ, республикабыҙ мәнфәғәтенә лә хеҙмәт итергә нимә дәртләндерергә, нимә көс бирергә тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

**Таңһылыу Ҡарамышева:** Һорауҙа "рух" һүҙе осраҡлы рәүештә генә килеп сыҡмағандыр тимен. Мин был төшөнсә хаҡында күп уйландым. Уйланам. Кеше - ул иң тәүҙә рух, тигән инанысым бар. Тәнебеҙ иһә - йәнебеҙҙең, беҙҙең үлемһеҙ рухыбыҙҙың ҡабығы, тышлығы ғыналыр. Әгәр ҙә һин үҙеңде ниндәйҙер бер халыҡтың вәкиле, ниндәйҙер бер ватандың, кешелекте төйәк иткән ер шарының ағзаһы итеп тоЯһың икән, донъябыҙҙы, ғәләмебеҙҙе бар итеүсенең дә, дин теле менән әйткәндә, Аллаһы Тәғәләнең дә бер өлөшсәһе итеп тойорға тейешһеңдер ул. Рух ул беҙҙең кейем кеҫәһендә ятыусы нәмә түгел. Рух - ул беҙҙең үҙебеҙ. Башҡортлоҡ та - ул иң әүәле рух, ә ата-бабаларыбыҙ ҡаны ғына түгел. Һәр милләттең көсө тап уның рухи сығанаҡтарында ята. Рухһыҙ кеше үҙ милләтенең вәкиле була алмай. Әгәр башҡорт рухһыҙ халыҡ булһа, дәүерҙәрҙең ҡатмарлы һынылыш осорҙарында тарих арбаһынан төшөп ҡалған булыр ине. Рухи көсөбөҙ беҙҙән яугир халыҡты тыуҙырған. Әгәр ҙә бөгөн Рәсәйҙә Башҡортостан Республикаһы тигән берәмек бар икән, ул башҡорт халҡының рухи көсө булған өсөн генә барлыҡҡа килгән. Уны һаҡлау - иң изге маҡсатыбыҙ. Азатлыҡ, үҙбилдәләнеш тойғоһо ул беҙҙең халҡыбыҙҙың рухында һаҡланып ҡалған нәмә. Ул беҙҙең мораль көсөбөҙ, ныҡлығыбыҙ, кешелек асылыбыҙ. Беҙ - матди булмаған башланғыс, беҙ - рух!

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Икемең йыл һуҙымында үҙ ерҙәренән, туған телендә аралашыу мөхитенән ситтә йәшәргә мәжбүр ителеп тә, һуңынан кире үҙ дәүләтселеген, туған телен тергеҙгән йәһүдтәр быға милли рухы менән өлгәшә алған. Ә нимә һуң ул милли рух? Ул тарихи хәтерҙең хәҙерге көндәге сағылышы. Шундайын тарихыбыҙ, ҡаһарман шәхестәребеҙ, аҫыл йырҙарыбыҙ, мәңгелектең үҙе кеүек оҙон көйҙәребеҙ, дәртле һәм мәғәнәле бейеүҙәребеҙ, моңло ҡурайыбыҙ була тороп, был мәсьәлә беҙҙең алда мөмкин булмаған ғәмәл булып торорға тейеш түгелдер тип уйлайым. Уйлап ҡына ҡалмайым, инанам.

**Наилә Хамбалеева:** Был һорауға пафослы, дөйөм һүҙҙәр менән яуап бирергә булыр ине лә... Эйе, рухи төшөнкөлөк менән ыңғай һөҙөмтәгә ирешеү ауыр. Үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрергә, шул уҡ ваҡытта республикабыҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә тиһегеҙме? Ә мөхәббәт бит ике яҡлы булһа ғына матур балалар тыуа, тип шаяртып ебәрәйемме икән? Үрҙә әйтеп үтелгән һәр бер ниәт, теләк бойомға аша торған булһа, был республикабыҙҙың (был осраҡта, хөкүмәтебеҙҙең) беҙгә ҡарата мөхәббәте тип әйтергә булыр ине. Ә беҙ, уның халҡы, үҙ сиратыбыҙҙа уға ҡарата яуап һөйөүебеҙҙе - намыҫлы хеҙмәтебеҙҙе, көсөбөҙҙө, рухи байлығыбыҙҙы бирер инек. Тәрбиәле, белемле балаларыбыҙҙы үҙ төйәгебеҙҙә уҡытып, һөнәр алдырып, үҙ төйәгебеҙгә уҡ хеҙмәт итергә ҡалдырыуға өлгәшер инек.

**Һәр Яңы йылды иң яҡты өмөттәр менән һуғарылған бер мөғжизәләй ҡаршы алабыҙ. Оҙаҡ йылдар көткән мөғжизә ни ул һеҙҙең өсөн?**

**Таңһылыу Ҡарамышева:** Мин күптән инде бер Яңы йылдан да бер ниндәй мөғжизә лә көтмәйем. Ғөмүмән, тормошта бер кемде лә бер ҡасан да бер ни ҙә көтөп тормай тип иҫәпләйем. Бар мөғжизәне үҙеңә үҙең тыуҙырырға тейешһең. Йәғни барыһын да үҙең менән алып килергә кәрәк. Ҡунаҡҡа үҙ ризығың менән барған кеүек. Яңы йыл байрамына - алдағы көнгә ниәттәреңде алып кил, ғаиләңә - мөхәббәтте, һәр яңы көнөңә - бәхетте, дуҫ-иш, туған-тумасаңа күңел йылыһын бир! Йәшәй-йәшәй ситтән сәғәҙәт өмөт итмәҫкә ғәҙәтләндем. Өмөт - ул бит һинең нимәгәлер ҡарата ҡарарың юҡлығын, үҙ өҫтөңә яуаплылыҡ алмауыңды аңлата. Яуаплы кеше булыу үҙе бер мөғжизә түгелме ни? Тап бына ошондай яуаплылыҡҡа эйә булған ата-бабаларыбыҙ халҡыбыҙ ғүмерен, яралған һәм көн иткән төйәгебеҙҙе бихисап ҡорбандар биреп һаҡлап алып ҡалған, кемдер беҙгә үҙаллылыҡ бирер тип, мөхтәриәт бүләк итер тип көтөп ултырмаған, иҫ китерлек, ғәжәп ҡылырлыҡ батырлыҡтар күрһәткән, ысын мөғжизәләр тыуҙырған! Яңы йыл ҡотлауы итеп ошондай һүҙҙәр генә әйткем килә: артабан да мөғжизәләр тыуҙырыуға һәләтле халыҡ булып ҡалайыҡ!

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Мөғжизәләр көткән ергә, көткән ваҡытҡа килмәй тиҙәр. Үҙенән-үҙе килгән мөғжизә ул Ивандың мейес башына ултырып ниҙер көтөүе йә булмаһа тағы ла бер әкиәт геройының суртан әмере буйынса мөғжизә там итеүе түгел. Оҙаҡ йылдар ҡалала йәшәһәм дә, мин һаман да шул крәҫтиән балаһы инде. Атайым мәрхүм 70 гектар ер алып, шул ергә йыл һайын иген сәсеп, бер нисә йыл рәттән ямғыр көтөп, көтөк булып, бағыйлыҡҡа күсте. Хәҙер бит үҙ ваҡытында яуған ямғыр-ҡарҙар, үҙ миҙгелендә килгән ҡыштар, яҙҙар, йәйҙәр һәм көҙҙәр ҙә мөғжизәгә әүерелде. Мин ана шул мөғжизәне көтәм.

**Наилә Хамбалеева:** Мөғжизәләр көтмәгәндә тыуһа ғына булмышлыңды ялай бит әле ул. Һәр кем һымаҡ, мин дә Яңы йылдан мөғжизәләр көтәм. Бына тыуып килгән йылды ла матур теләктәр, яҡты үйҙар менән ҡаршылайым. Донъялар имен булһын, әҙәмдәр ишле булһын. Мөхәббәтле ғаиләләрҙә тәүфиҡлы балалар донъяға килһен. Ҡазалы үлемдәр бөтөнләйе менән булмаһын ине тип теләйем. Һәр кеше яҡты донъяларҙан йәшәрен йәшәп китһен. Ҡулдарында дилбегә булғандар, иманын юлдаш итеп, халҡым тип тартһын йөгөн. Кешеләр, үҙ сиратында, бер-береһен яратһын, хөрмәт итһен. Яңы йыл менән, милләттәштәрем! Яңы йыл менән бар бөйөк Башҡортостан халҡы! Бар теләгән теләктәребеҙ тормошҡа ашһын! Бәрәкәте менән тыуһын 2020 йыл!

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАЙРАМ КҮТӘРЕШӘЙЕК!



**Яңы йылды көтөп йөрөгәндә бер халыҡсан әйҙәләү иҫкә төштө, ул да булһа, "Байрам күтәрешеү" йолаһы.**

...Бөрйән районында оҙаҡ йылдарҙан бирле балаларҙың "Ағиҙел" йәйге ял-һауыҡтырыу лагеры эшләй. Унда ял итеүселәр генә түгел, бер генә барып күреүселәр ҙә ғүмеренә онота алмаҫлыҡ тәьҫораттар менән ҡайта. Ә мин был урында тәүге таптҡыр "Байрам күтәрешеү" йолаһы атҡарылыуға шаһит булып оҡшаттым. 1993 йылда бөрйәндәр беренсе мәртәбә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының республика конференцияһын уҙғарҙы. Тәүләп шунда кейеҙ тирмәлә йоҡланыҡ, ҡаҙан ашы ашаныҡ, көбөләрҙән һоҫоп биргән ҡымыҙ эстек. Беҙ - ярай инде, килгән ҡунаҡ, ә һыйлаусылары - хужалар, Бөрйән районы уҡытыусылары. Ҡолас ташлап бейеп, баш сөйөп йырлап алдыбыҙҙа тып баҫып торалар. "Конференция шулай буламы, беҙ бит эшләргә килдек", тип тамаҡ ҡырған министрлыҡ хеҙмәткәрҙәрен ул осорҙа ғәләмәт популяр булған "Ай-һай, Салауат!" йыры менән йәнә әүрәтеп, хор менән йырлатып, Ағиҙел ярындағы майҙанда әле көрәш, әле спорт уйындарын ҡарарға әйҙәйҙәр. "Бөрйәндәге бөтә уҡытыусылар ҙа шулай йыр-бейеүгә шәп икән", ти республика райондарынан килгән уҡытыусылар аптырап. Ә бөрйәндәр көләләр:

- Уҡытыусылар конференция үткәрә, ә беҙ, ҡәҙимге ауыл кешеләре, көтөүселәр ҙә һауынсылар, хеҙмәт ветерандары ла балалар - һәммәбеҙ йыйылып, һеҙҙе күрергә, үҙебеҙҙе күрһәтергә, байрам күтәрешергә килдек, - тиҙәр.

- Бик хуш, ҡайын ауылдарҙа йәшәйһегеҙҙер улайһа?

- Тау аша туранан йөрөһәк - ун саҡрым, урауҙан оло юлдан йөрөһәк- утыҙ саҡрым...

Ҡыҫҡаһы, ике көн буйы барған конференция эшен тирә-яҡ ауыл халҡы йәнләндерҙе - байрам күтәреште. "Нишләп йөрөйһөгөҙ, ҡыҙыу йәйге эш мәлендә?" - тибеҙҙер инде, таҡмаҡлап бейеп яуап бирәләр: "Бөрйәнемә ҡунаҡ килгән, инде ни хәл итәйек? Ит бешмәһә, бит бешә бит, байрам күтәрешәйек!"

2015 йылда бөрйәндәр "Урал батыр" эпосын башҡарыусы мәктәп уҡыусыларының республика бәйгеһен ҡабул итте - улар 1996 йылда башлағайны был изге эште, һаман ҡулдан ысҡындырмай тырышыуҙары. Ләкин был көндәрҙә төрлө тарафтан тулған бала-сағаны күрергә йәнә бик күп ауыл кешеләре килеп тулды "Ағиҙел"гә - эркелешеп йәйәүләп тә, ат егеп тә, машина менән дә килгәндәр, аҙыҡ-түлек бешергәндәр, ҡул эштәрен тотҡандар. "Нишләп йөрөйһөгөҙ?" - "Байрам күтәрешәбеҙ!" Эҫе йәйге оҙон көндө балаларҙың һәр сығышына ҡул сабып, һайһыулап ҡарап, һыуһағанына сәй эсереп, арығанына күләгәле тирмәлә ял биреп, үҙ төбәгенең көсептәрен күрһәтеп, хәл-әхүәлдәрен һорашып-танышып уҙғарҙылар.

Ысынлап та, халыҡтың ошондай эскерһеҙ ярҙамы һәм ваҡиғаға күҙ-ҡолаҡ булыуы, йәғни "байрам күтәрешеүе" бик тә кәрәкле йола. Тыуған ерҙә үҙен хужа итеп тойған заттар ғына шулай ууяу һәм дәрәжәле итеп байрам күтәрешә. Әйҙәгеҙ, был йоланы ла онотмайыҡ!

Сәрүәр СУРИНА.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺОЛО БУТҠАҺЫ АША

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлектә артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сәтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көртмәле, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлектә холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Тәмәке тартыу бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай. Айова штаты университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙың уйлау һәләте түбәнәйә. Тест ярҙамында ғалимдар баш мейеһе эшмәкәрлеген тикшерә һәм фекерләү функцияһының боҙолоуын асыҡлай. Был ҡатын-ҡыҙ организмында бүленеп сыҡҡан эстроген гормоны менән бәйле һәм тәмәке ҡанда был матдә туплаңыуының аҙайыуына килтерә.

■ Әгәр ҙә башығыҙ йыш ауырта икән, дарыуханаға барырға ашыҡмағыҙ. Тайвандың милли университеты табиптары белдереүенсә, баш ауыртыуын ябай массаж бөтөрә. Бынан тыш, массаж күңелһеҙ хәлдәрҙә онотоорға мөмкинлек бирә. Ғалимдар фекеренсә, массаж депрессияны еңергә лә ярҙам итәсәк.

■ Антибиотиктар ҡабул иткән ваҡытта һаҡ булырға кәрәк, тип иҫкәртә Миссурилағы Медицина мәктәбе университеты белгестәре. Бәктиһәң, бындай дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡулланмау ишетеү һәләтенең насарайыуына килтереүе ихтимал икән. Ғалимдар тикшереүҙәрҙә ике препарат - канамицин һәм уның балалар өсөн тәғәйенләнгән аналогы гентамицин нигеҙендә үткәрә. Был ике препарат та ауырыуҙарға йыш тәғәйенләнә. Табип билдәләгән дозаны 10-20 процентҡа ғына арттырыу ҙа ишетеү һәләтен юғалтыуға килтереүе ихтимал, тигән һығымтаға килә ғалимдар.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәшлек һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Көсөргәнешле эштең файҙалы яҡтары ла күп. Мәҫәлән, ул кешегә тәмәке тартыуҙы ташларға ярҙам итә. Яңы тикшеренеүҙәргә ярашлы, кешенең хеҙмәт урынында эше күберәк һәм тығыҙыраҡ булған һайын, уның никотинға бәйлелеге түбәнәйә. Кельн ҡалаһы университетынан Анна Шмидт етәкселегендәге тикшеренеүселәр командаһы 197 тәмәке тартыусыны махсус тест аша үткәреп, эш урынында тынысыраҡ булған һайын кеше шул тиклем йышыраҡ тәмәке тартыуын асыҡлаған.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ДОНЪЯНЫ ҮҘГӘРТЕП БУЛМАҺА,

## үҙебеҙ үҙгәрәйек!

**Оло йәштәге бер танышым бар. Аҙмы-күпме - һикһән йәшен тултырҙы быйыл. Аралашып йәшәүебеҙгә егерме биш йыл тирәһе ваҡыт үткәндер. Йәш арабыҙ ҙур булһа ла, күп фекерҙәребеҙ уртаҡ, шуға ла дуҫлығыбыҙ оҙаҡҡа һуҙылғандыр, тип уйлайым.**



Өлкән әхирәтемдең иғтибарҙы йәлеп иткән иң мөһим сифаты - тормошто яратыуы. Был хаҡта ул, әлбиттә, һөрән һалып йөрөмәй. Ошо һыҙатын йыш ҡына башҡаларға ла өлгө итеп ҡуям мин. Тормошҡа ғашиҡлығы ябай ғына күренештәрҙә лә сағыла. Мәҫәлән, ғәҙәти көнитмешенә ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырышыуынан да быны тәҫмөрләргә мөмкин. Һикһәне тулғанысы пенсияһы аҙ булды. Әммә аҡсаһын коммуналь түләүҙән, дарыуҙан, аҙыҡ-түлектән арттырып, өҫтөнә ниндәйҙер яңы бер кейем һатып ала йәки өйөндә нимәнелер яңырта. Кухня таҫтамалын булһа ла алмаштырып ҡуя ул. Түшәк кәрәк-яраҡтарын, һауыт-һабаһын да төҫө, биҙәге уңғансы тотонмай. Ямғыр яуһа, уның тамсыһынан, ҡар яуһа, уның бөртөгөнән матурлыҡ табып, балаларса ҡыуана.

Бынан бер нисә йыл элек аяғын һындырып, дауаханаға яткайны. Шунда уның һаулығы өсөн нисек көрәшкәнен күреп, хайран ҡалғайным. "Минә нисек тә торорға кәрәк!" тип үҙ-үҙенәме, әллә эргәһендәге кешеләргәме, тиҫтәләгән-йөҙләгән тапҡыр әйткәнен ишеткәнем булды. Торорға, яңынан аяҡҡа баҫырға шул тиклем теләге ҙур булды. Һөйәк тукымаһын нисек тә тиҙерәк уңалтыу, нығытыу тураһында медицина белешмәләрен алдырып уҡыны, йәш саҡта алған энциклопедияларын яңынан аҡтарҙы, врачтар менән кәңәшләште, үҙе һымаҡ имгәнгән кешеләрҙең тәжрибәһен өйрәнде. Һынған һөйәк буйынса бөтә белгәнен, ишеткәнен, уҡығанын бергә туплап, алтын урталыҡты табып, операцияһыҙ барыбер аяғына баҫты.

Күптән түгел уның тағы бер һоҡланғыс сифатын астым.

- Тормоштан, кешеләрҙән, күршеләрҙән ҡәнәғәт булырға өйрәнә башланым әле, - тип әйтеп һалды ул.

Туғыҙынсы тиҫтәһен ваҡлаһа ла, ул һаман үҙе өҫтөндә эшләй, холоҡ-фигеленең ыңғай-кире яҡтарын анализлай ҙа баһа был! Ысынлап та, йыш ҡына күрше-тирәһе шаулауына, экологияға, илдә барған сәйәси ваҡиғаларға, магазиндағы аҙыҡ-түлектең сифатһыҙлығына, хаҡтарға зарланғанын ишеткәнем бар. Был холоҡ бөтәһендә лә бар, тип, уға иғтибар ҙа бирмәй инем. Ә ул ошо ҡылығын кире сифат тип, унан ҡотолорға уйлай икән дә.

- Нисегерәк ҡәнәғәт булырға өйрәнәһегеҙ? - тим.

- Иң беренсе, быға тиклем мине тынысһыҙлаған, хәүефкә һалған, борсоған күренештәр менән ризалаша башланым. Күпме тыпырсыһам да, күршемдең төн уртаһына тиклем телевизор ҡарарға яратыуын, һатыуҙағы аҙыҡ-түлектең сифатын, хаҡын мин бер нисек тә үҙгәртә алмайым бит. Быға тиклем ошо ябай ғына нәмәне аңламағанмын. Әрләшеп-бәхәсләшеп, нисек тә булһа һүҙемде һүҙ итермен тип уйлап, үҙемә лә, башҡаларға ла тынғылыҡ бирмәгәнмен икән. Аллаға шөкөр, күршем эскесе йәки янъялсы түгел. Аҙыҡ-түлек магазинында ҡытлыҡ юҡ, теләгәнеңде һайлап алырға мөмкин, - тип һығымта яһап ҡуйҙы.

Проблеманы хәл итә алмаһаң, уға ҡарашыңды үҙгәрт, тигән хәҡиҡәткә туҡһанға аяҡ баҫҡас ҡына төшөнөп, камиллашыуҙың тағы бер баҫҡысына күтәрелде ул апай. Быхна бит, үҙгәрәм тиһәң, һикһәндә лә, туҡһанда ла үҙгәрергә була икән. Юғиһә, холоҡто үҙгәртеп булмай, тип, хаталанып йөрөй бирәбеҙ...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҮҘЕБЕҘ ЕТЕШТЕРГӘНДЕҢ...

## файҙаһын күрәйек!



**Ауыл тормошонда күңелле мәл: халыҡ тәүҙә ҡыпраҡ ҡар төшөп, туңдыра ла башламаҫтан гөр килеп ҡаҙ өмәләре үткәрҙе. Һимеҙ-һимеҙ ҡаҙ, өйрәк түшкәләре баулап, келәт урҙаларына эленде, һыуыткыстарға тултырылды. Мамығынан уңған килен-еңгәләр шундуҡ ҡабарып торған яҫтыҡ-мендәрҙәр яһап өйҙө; бешеренептөшөрөнгәндә лә, им-том өсөн дә, башҡа осраҡтарҙа ла хужалыкта кәрәге тейеп кенә торған шифалы ҡаҙ майы иретелеп, һаҡлауға ҡуйылды - үҙең ҡарап, тәрбиәләп үҫтергән хәләл ҡош-корттоң хатта ҡауырһын-ҡанаттары ла әрәм ителмәй, эшкә ҡушыла шул.**

Ер йөҙөн ҡар ҡаплау менән халыҡ тағы зыҡ ҡубып һуғым һуя башланы: кем - йылҡы малы, кем - көрәйтелгән башмаҡ йә үгеҙ. Был осорҙа бер-береңә ярҙамға килеп етеү, өмә ойоштороуҙар тәбиғи һәм дә изге йолаларҙан. Унан китә һуғым ашатыу, ҡара-ҡаршы саҡырышыуҙар. Әйткәндәй, һуңғы ваҡыт бындай мәжлестәрҙең күпселек осраҡта эскеһеҙ, матур, тәрбиәле рәүештә үткәрелеүе һөйөндөрә. Уңған, эшһөйәр ауыл кешеһенең тормошо ана шулай мул, бәрәкәтле. Лаҡапҡа әйләнеп бөткән "Ауылда эш юҡ" тигән һүҙҙе хәҙер елкәһе йоҡа әҙәм генә ҡабатлайҙыр ҡабатлаһа. Эше булмағандың, әлбиттә, ашы ла юҡ. Йүнле кеше шәхси хужалығында эшләп тә бына тигәнсә етеш тормошта йәшәй. Кемдер, мәҫәлән, һатып ебәреү өсөн дә мал аҫрай, емерелеп уңған картуфын ҡайҙа ҡуйырға белмәй.

Эйе, ҡаланан, район үҙәктәренән алыҫ яткан ауылдарҙа үҙең етештергәнде һатып файҙаһын күреү - оло бер проблема. Үҙ транспортың менән ҡалаға алып барып һатыр инең, бының өсөн юлдарҙы ябып бөтөрҙәләр: йә бөткөһөҙ ҡағыҙ - белешмә, рөхсәт һорап йонсоталар кешене, йә баҡсаһында үҫтергәнде һатыр өсөн (быныһы инде бөтөнләй кешенән көлөү!) шәхси эшҡыуар булып теркәлеүҙе, килемдән һалым түләүҙе талап итәләр... Үкенес, ләкин бына ошондай ваҡытта, нервыларҙы ҡаҡшата торған бюрократик кәртәләр менән бәйләнергә теләмәгәндәр хәләл продукцияһын ситтән килгән йылғыр, хәйләкәр аралашсыларға арзан хаҡҡа биреп ебәрергә мәжбүр була. Шундай осраҡтар булмаһын өсөн, исмаһам, ауылдарҙа халыҡтың үҙ хужалығында етештергән һатлыҡ малын, итен, йәшелсәһен йыйып алып, яҡынтирәләге ҡала йә район үҙәктәрендәге сауҙа нөктәләре, баҙар, ашхана йә ит эшкәртеү-колбаса етештереү кеүек предприятиелар менән килешеү төҙөп, шуларға һата алырлыҡ үткер, эшмәкәр ир-егеттәр табылһасы... Хәйер, хәҙер ауыл халҡы интернет аша ла оҫта эш итергә өйрәнеп алды: стенаңа иғлан ғына яҙып эл: транспорт һәр кемдә бар - ауыл ризығын әллә ҡайҙан килеп алып китерҙәр. Унан бит тағы ла ситтә йәшәүсе дуҫ-иш, таныш-тоношҡа ла үҙең етештергән тәҡдим итергә була, бының бер ҙә ояты юҡ: экологик таҙа, намыҫлы хеҙмәт емеше һәр ваҡыт үҙ ҡулланыусыһын табыр. Әйҙәгеҙ, үҙегеҙ етештергәнде үҙегеҙ һатырға ла өйрәнегеҙ әле, йәмәғәт!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Бөгөн дизайн, декор, интерьерҙар заманы. Һәр кем фантазияһы һәм аҡсаһы еткән хәтлем үҙе теләгәнен булдыра ала. Бының өсөн махсуслашҡан оҫталар ҙа етерлек. Шуның өсөн, йортоңа йә фатирыңа яңылыҡ индерергә теләйһең икән, милли элементтарҙы ҡулланыу иң үҙенсәлеклеһе, тигән фекер еткерге килә. Ундай биҙәүҙәргә, йыһаздарға һәр кемдең күҙе төшә, иғтибар итмәй, баһаламай ҡалмай.**

# ҮҘЕБЕҘСӘ ЙЫҺАЗЛАЙЫҠ!





Мәҫәлән, бер танышым тәҙрә ҡорғанына ламбрекен итеп милли орнаменттар ҡуйғайны. Бөтөн залда күҙгә иң ташланғаны шул булды һәм хужаларҙың үҙ баһаларын белдергән бер ымы һымаҡ ҡабул ителде. Күңелдә шундуҡ хөрмәт кеүек бер йылы тойғо яралды.

Икенсе берәүҙәрҙә ҡала фатирындағы иҙәнгә балаҫ урынына боронғоса әрмәк (тирүгә) түшәлгәйне. Балаҫ кеүек үк йылы ла, таҙалауы ла, йыуыуы ла еңел, тип маҡтанды хужабикә. Етмәһә, стеналағы обой өҫтөнән башҡорт биҙәкле таҫма һуҙылып, иҙәндәге әрмәккә тулылыҡ биреп тора. Шунда уҡ ҙур вазаға ҡуйылған кипкән ҡурай үләне был декорацияны айырым бер сихри донъя итеп күҙ алдына баҫтыра.

Үзбәкстанда булғанда һәр өйҙең зал түренә ҡуйылған урындыҡтар, беҙҙеңсә, һикеләр иғтибарҙы йәлеп иткәйне. Улар тәпәш кенә, ситтәре, боттары һырланып эшләнгән, киң, иркен бер карауат кеүектәр. Иң ҡыҙығы: был урындыҡты күсереп йөрөтөп була, ул йыйыла ла, ҡорола ла. Бында көндөҙ аяҡ салып ултырып ашарға, ҡунаҡтар һыйларға, кистәрен урын йәйеп ятып йоҡларға ла була. Уйлап ҡуям, нигә беҙгә бөгөнгө ҡала фатирында диван урынына еңел материалдан, биҙәп-нағышлап тороп шундай һике яһап ултыртмаҫҡа? Ниңә өҫтөнә сағыу япмалар ябып, түрюрғандар, күпмәләр ташлап, шунда ҡырын ятып телевизор ҡарамаҫҡа йәки ғаилә менән түңәрәтеп ултырып сәй эсмәҫкә? "Фу, боронғоса" тип кире ҡаҡмайынса, милли үҙаңды уятыр, балаларҙы һәм дуҫ-иште тәрбиәләр, үҙеңә ләззәт алыр өсөн дә кәрәк түгелме икән беҙгә бындай йыһаздар? Был осраҡта бөгөн күргәҙмәләрҙә генә йөрөгән әрмәктәр, һуҡма түшәктәр, ҡорама түшәктәр һәм башҡа ҡул эштәренә лә юл асылыр ине. Оҫталарға бер идея булһын әле был, уйлап-күҙәтеп, бәлки, шундай урындыҡтар яһап тәҡдим итерҙәр беҙгә.

Һандыҡ эшләтергә булғас, интернетта ошо хеҙмәттәренә реклама биргән ир-егеттәргә яҙып, үтенесем белдерҙем. Тик берәһе лә уны мин теләгәнсә яһай алмай булып сыҡты. Күптәр әҙер мебель материалынан йәтеш кенә ҡумта ҡора ла бирә икән. Уның өсөн артыҡ маһирлыҡ та кәрәкмәй һымаҡ. Ундай һандыҡтар саҡ ҡына дымдан сит-ситенән асыла, әлеге уртахаҡ мебелдәр кеүек йәһәт кенә кителә-сыйыла башлай. Һәм ике-өс йылдан кәрәкмәгән нәмә булып келәткә тығып та ҡуйыла. Миңә Әбйәлил районынан бер ағай яһап күргәҙмәгә ҡуйған боронғоса, ҡарағай таҡтанан яһалған, ҡапҡасы бөгөп көмбәҙләнгән, тышы йоҡа ҡалай менән тотошлай һырланған, ҡаштар һәм таштар менән биҙәлгән, ағасына милли нағыштар төшөрөлгән һандыҡ кәрәк ине. Оҫта заказ алмай, был уның ҡыҙына бирнә итеп эшләнгәне генә икән. Һәм, ышанаһығыҙмы, һандыҡтың ошондай боронғо бирелешенә йөрьәт итеп тотонғандай оҫтаны оҙаҡ ҡына эҙләргә тура килде. Ниһайәт, был заказды ҡабул итеүсе табылды. Быны нимә өсөн теҙеп яҙаммы? Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә боронғо һырлы-нағышлы һандыҡтарҙы өй биҙәге итеп ҡайтарайыҡ әле, тип әйҙәләге килгәнгә яҙам. Һандыҡ - ул туй биҙәге булһын өсөн генә, исем өсөн яһатылған атрибут түгел, ул ҡатын-ҡыҙ донъяһының бер дәрәжәле символы. Ул ғүмерлек булырға тейеш. Мәҫәлән, ҡаҙаҡтарҙа ҡатын-ҡыҙҙың һоҡланғыс һандыҡтары һәр ваҡыт күҙ күреме ерҙә тора. Заманса йыһазлы йорттарҙа ла һандыҡҡа урын бар..

Декор хаҡында һүҙ сыҡҡас, фатир ишектәрен, балкон тыштарын да милли стилдә биҙәргә була икәнде иҫегеҙгә төшөрәм. Тышҡы ишек яҡтауҙарын орнаментлы итергә, ишек уртаһына ҡурай һынын ҡуйырға була. Төркиәлә балкон һайын үҙ байраҡтары тора әле. Был тәңгәлдә лә мәғәнәле генә фекер йөрөтөргә була.

Машиналар темаһына килгәндә лә фантазияңды эшкә егергә мөмкин. Артҡы тәҙрәңә "Мин - башҡорт" тип яҙғансы, милли орнамент йәки символик һүрәт ҡуйыу күпкә отошлораҡ та, эстетикалыраҡ та буласаҡ. Шулай уҡ кабина япмаларына ла әлеге әйтелгән символдарҙы ҡуйып яһаған оҫталар бар.

Был темаға һәр кемдең үҙ ҡарашы, әлбиттә, әммә сит биҙәктәр, сит стиль эсендә йәшәүгә ҡарағанда, үҙ менталитетыңа, үҙаңыңа яҡын һәм аңлайышлы булған солғанышта көн итеү күпкә яҡшы, минеңсә. Был тыныслыҡ та, уңайлыҡ та, үҙең булып ҡалыу ҙа ул. Заманса тормоштан да айырылма, шул уҡ ваҡытта башҡортлоғоңдо ла һаҡла. Таш ҡумтала сит интерьер солғанышында ҡалдыҡ, юғиһә. Бына шундай тәҡдим-теләк Яңы йылға.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАХЫРЛАНМАЙЫҠ!

**Бахырланыуҙы мин үҙем аҙым һайын тоя, күрә йөрөйөм. Баҙарҙа, урамда, эш урынында. Баҙарҙа, мәҫәлән, мин гел генә бер башҡорт ҡыҙынан емеш-еләк һатып алам. Минең менән асылып китеп үҙебеҙсә һөйләшә лә, башҡалар менән телен боҙа-боҙа татарса һупалай башлай. Бер ваҡыт тәнҡитләнем тегене. "Эй, апай, башҡортса һөйләшә башлаһаң, көләләр, яратмайҙар бит" , - ти был. Үҙеңде һәм телеңде нисек хөрмәт иттерергә өйрәтеү тураһында байтаҡ нотоҡ уҡыным үҙенә. Был бахырланыуҙың бер миҫалы инде.**

Бына миңә гел генә бер нисә төрлө милләт вәкиленән торған коллективтарҙа эшләргә тура килде. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, миңә хөрмәт менән, ошо республиканың, ошо ерҙең төп хужаһына ҡараған кеүек ҡаранылар, һәр мәсьәлә буйынса миңә кәңәш менән мөрәжәғәт иттеләр. Башҡортостаныбыҙҙың, халҡыбыҙҙың тарихын яҡшы белеүем, мәҙәниәт, сәнғәт буйынса теләһә ниндәй һорауға яуап бирә алыуым, театрҙарға, концерттарға йөрөү әүҙемлегем, әлбиттә, төп вазифамды урынына еткереп башҡарыуым мине коллективтың уртаһында булырға ярҙам иткәндер тим. Шуның өсөн, әгәр һин башҡорт икәнһең, үҙеңде туҡтауһыҙ камиллаштыр, үҫтер, уҡы, "Һин башҡаларҙан яҡшыраҡ булырға тейешһең, сөнки һин ошо ерҙең төп хужаһы һәм һин һәр кемдең күҙ алдында" тигәнде аңыңа һеңдер. Ә инде быларҙы эшләмәйһең икән, "Беҙҙе яратмайҙар, телебеҙҙән көләләр" тип, үҙ булдыҡһыҙлығыңды милләткә япһарма. Шундай кәңәш бирге килә милләттәштәремә. Әлбиттә, был кәңәш татар ҡәрҙәштәргә лә ярап ҡалыр. Улар араһында ла күп меҫкенләнергә яратыусылар. "Башҡортостанда татарҙарға көн юҡ" тип лаф ороу - шул уҡ меҫкенләнеүҙең бер миҫалы бит. Татарҙың аҫылы улай тип әйтмәҫ, сөнки ундай һығымта яһарға, берҙән, сәбәп юҡ, икенсенән... Әйттем инде, үҙ булдыҡһыҙлығыңды тотош милләт исеменән һөйләп аҡларға тырышыу - енәйәт.

**Гөләрә ИҪӘНБАЕВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 1-се идея: Алтын һинең аҡыл подвалыңда

Әгәр кемдер килеп, йортоңдоң подвалында алтын тәңкә менән тулы йәшник ултыра, тиһә, һин ни тиерһең? Ғәжәпләнеүеңде төрлөсә белдерә алаһың, әлбиттә, ләкин бындай хәбәргә ҡолаҡ һалмай булдыра алмайһың. Моғайын, төшөп, алтын тәңкә тулы йәшникте килтерерһең һәм уға ҡулланыу табырһың. Әммә беҙҙең күбебеҙҙең үҙенең аҡыл подвалы алтын тулы йәшник һымаҡ булыуы, ләкин бер ваҡытта ла унан файҙаланмауығыҙ хаҡында уйланғанығыҙ бармы икән? Беҙҙең фекерләүебеҙ аҫтында тәрәндә "аң аҫты" тип аталған аҡылыбыҙҙың иң яҡшы өлөшө ята. Бөтә аҡыл аң аҫтына туплана, әммә ул тышҡа сығарылмай. Был хәтер склады, йәшерелгән ҙур белем һаҡлағысы. Уңышҡа өлгәшеү өсөн беҙ уны яҡшыраҡ файҙаланырға тейешбеҙ. Беҙ, яҡтыртылмаған бүлмәлә буш өҫтәл артында ултырып һәм үҙ аҡыл подвалындағы алтын тулы йәшник тураһында белмәй, фәҡир һымаҡ йәшәргә күнеккәнбеҙ.

Аң аҫтындағы аҡылды көндәлек тормошта хеҙмәт иттерергә мөмкин. Компьютерҙағы кеүек, аңыбыҙҙағы һәр факт, һәр тәьҫорат аң аҫтында һаҡлана. Был ғәжәйеп көстө нисек үҫтерергә һәм файҙаланырға өйрәнергә һуң? Аң аҫтының йәшерен батшалығына нисек эйә булырға? Быны, әлбиттә, ашыҡ-бошоҡ эшләргә ярамай. Аң аҫтының йәшерен көстәре аҡрын һәм даими иғтибарҙы туплау барышында үҫешергә, ихтыярыбыҙ һәм хыялыбыҙ тарафынан йүнәлтелергә тейеш.

Һин башта нимә теләгәнеңде хәл ит һәм аң аҫтына берәр генә йөкләмә бир. Әгәр билдәле бер проблеманы хәл итергә теләйһең икән, ул ҡарар һинең аң аҫты кимәлендә формалашыуы хаҡында иртән һәм кисен бишәр минут тыныс ҡына уйлан. Һуңынан көтөлмәгәндә - шалт! - ҡарар әҙер була.

Әгәр һин сәләмәт булырға теләһәң, фекерҙәреңде тик һаулыҡҡа ғына тупла, сирҙәр тураһында уйлап, үҙеңә ҡамасаулама. Әгәр уңышҡа өлгәшергә теләһәң, үҙең тураһында уңышһыҙ кеше тип уйлама. Бәхетле булырға теләһәң, борсолоуҙарыңда һәм төңөлөүҙәреңдә тотҡарланма. Аң аҫты Йыһан Аҡылына тоташыуын һәр ваҡыт иҫеңдә тот. Ошо хикмәткә ышан һәм һин аҙыраҡ хаталанырһың, һаулығың нығыныр һәм бәхетлерәк булырһың. Күпкә уңышлыраҡ йәшәй башларһың.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 30 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 3.50 "Модный приговор". Новогодний выпуск. [6+]
10.50 "Жить здорово!" Новогодний выпуск. [16+]
12.10 Сегодня вечером. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Три аккорда". Новогодний выпуск. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Финал. [16+]
0.15 Х/ф "Пурга". [12+]
2.10 "Большая разница". Новогодний выпуск. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 20.00 Вести.
9.25 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.25, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Х/ф "Зинка-москвичка". [12+]
16.00 Короли смеха. [16+]
18.35 100ЯНОВ. [12+]
21.00 Х/ф "Тайны следствия. Прошлый век". [12+]
1.55 Х/ф "Золотая невеста". [12+]
3.52 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм.**
**10.00 Х/ф "Сулпан". [0+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 "Специальный репортаж". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]**
**15.15 "Әлләсе". [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Бирешмә, Ҡыш Бабай!" [0+]**
**17.15 Мин башкортса һөйләшәм. [0+]**
**18.00 "Ради добра". [6+]**
**18.15, 20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр. Итоги года.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Дорожный патруль". [16+]**
**21.00 "Бизнес-обзор". [12+]**
**21.15 "Полезные новости". [12+]**
**22.00 "Тайм-аут". [12+]**
**22.30 Итоги года (на баш. яз.).**
**23.30 "Күстәнәс". [12+]**
**0.00 Х/ф "Тот самый Мюнхгаузен". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.45 "Орнамент". [6+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

## 31 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 15.00 Новости.
9.05 Х/ф "Золушка". Кино в цвете. [0+]
10.40 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
12.10 Премьера. "Главный новогодний концерт". [12+]
14.00, 15.15 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
17.10 Х/ф "Служебный роман". [0+]
19.40 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
21.00 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
22.30, 0.00 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.

### РОССИЯ 1

3.55 Х/ф "Доярка из Хацапетовки". [12+]
7.30 Короли смеха. [16+]
9.50 Золушка.
12.00 Х/ф "Девчата".
14.00 Вести.
14.20 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика".
16.15 Х/ф "Бриллиантовая рука".
18.05 Х/ф "Джентльмены удачи".
19.30 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!"
22.50 Новогодний парад звезд.
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
0.00 Новогодний голубой огонёк-2020.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Х/ф "Шульган-Таш". [6+]**
**11.15 "Гора новостей". [6+]**
**11.45 Республиканская елка-2019. [0+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Новогодний звон "Сулпылар". [0+]**
**17.00 Х/ф "Мир потеряшек". [0+]**
**17.45 "Теге өсәү". [12+]**
**18.45 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**20.00 Итоги года (на рус.яз.).**
**21.00 "Бал джигитов". [12+]**
**22.45, 0.00 "Башкорт йыры-2019". [12+]**
**23.50 Новогоднее поздравление Главы Республики Башкортостан Радия Хабирова. [0+]**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина. [0+]**
**1.30 Яны йыл-караоке. [12+]**
**3.30 Х/ф "Новогодний брак". [6+]**
**5.00 Д/ф "Йондоз". [12+]**

## 1 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
7.35 Новогодний календарь. [0+]
8.40 Х/ф "Золушка". Кино в цвете. [0+]
10.00, 15.00 Новости.
10.15 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
11.30 Х/ф "Морозко". [0+]
12.50, 15.15 Х/ф "Служебный роман". [0+]
15.40 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
17.00 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
18.35 "Лучше всех!" Новогодний выпуск. [0+]
20.00 Д/ф Главная премьера года. "Алла Пугачева. Тот самый концерт". [12+]
21.35 Премьера. Юбилейный вечер Игоря Крутого с участием мировых звезд фигурного катания. [12+]
23.35 "Голос". Финал. Прямой эфир. [12+]
1.40 Х/ф Премьера. "Богемская рапсодия". [18+]
3.45 Х/ф "Ночь в музее". [12+]

### РОССИЯ 1

4.00 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!"
7.30 Х/ф "Девчата".
9.15 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика".
10.55 Песня года.
13.15 Х/ф "Бриллиантовая рука".
15.00 Х/ф "Джентльмены удачи".
16.35 Юмор года. [16+]
18.30 Х/ф "Одесский пароход". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
22.45 Х/ф "Миллиард". [12+]
0.35 Х/ф "Ёлки-5". [12+]
2.15 Х/ф "Охота на пиранью". [16+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**8.00 Х/ф "Новогодний брак". [6+]**
**9.30 М/ф "Песнь моря". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Мир потеряшек". [0+]**
**12.00 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Башкорт йыры-2019". [12+]**
**17.45 Яны йыл-караоке. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 "Байык-2019". Гала-концерт. [12+]**
**21.30, 6.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.45 Ретро-концерт. [12+]**
**0.15 Х/ф "Выжить в Арктике". [12+]**
**1.45 Д/ф "Любовь и звезды". [12+]**
**3.15 Весело живем. [12+]**
**3.30 Д/ф "Знакомые незнакомцы". [12+]**

## 2 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Х/ф "Морозко". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 М/ф "Ледниковый период: Глобальное потепление". [0+]
8.30 М/ф "Ледниковый период: Континентальный дрейф". [0+]
10.15 Х/ф "Один дома". [0+]
12.10 Х/ф "Один дома-2". [0+]
14.30 "Точь-в-точь". Новогодний выпуск. [16+]
18.00, 4.15 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.55 "Голос". Финал. [12+]
21.00 Время.
21.20 Сегодня вечером. [16+]
23.30 "Голубой Ургант". Новогодний выпуск. [16+]
0.25 Старые песни о главном. [16+]
2.00 Х/ф "Джентльмены предпочитают блондинок". [16+]
3.30 "Модный приговор". Новогодний выпуск. [6+]

### РОССИЯ 1

5.40 Х/ф "Миллиард". [12+]
7.50 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20 Песня года.
13.45 Х/ф "Приличная семья сдаст комнату". [12+]
17.40 Юмор года. [16+]
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Другие". [12+]
1.20 Х/ф "Черновик". [12+]
3.20 Х/ф "Вычислитель". [16+]
4.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.45 Х/ф "12 Рождественских собак-2". [12+]**
**9.30 М/ф "Волшебное королевство Щелкунчика". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Карйондоҙ". [0+]**
**12.00 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 Х/ф "Ургала". [12+]**
**16.30 "Ради добра". [6+]**
**16.45 "Земляки". [12+]**
**17.00 "Полезные новости". [12+]**
**17.15 Детей много не бывает. [12+]**
**17.45 Яны йыл-караоке. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**19.15, 21.45 Юлдаш-хит-2019. [12+]**
**21.30, 6.45 Новости (на рус. яз.).**
**23.30 "Йөрәк һүҙе-2019". [12+]**
**3.15 Спектакль "Караул, тещу украли". [12+]**
**4.30 Д/ф "Знакомые незнакомцы-2". [12+]**

## 3 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Финист-Ясный сокол". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.30 Х/ф "Старик Хоттабыч". [0+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.20 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.15 Повтори! [16+]
17.30 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.50 "Поле чудес". Новогодний выпуск. [16+]
21.00 Время.
21.20, 22.20 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Старые песни о главном. [16+]
2.00 Лыжные гонки. Кубок мира-2019-2020. Тур де ски. Мужчины. 15 км. Трансляция из Италии. [0+]
2.45 Х/ф "Давай сделаем это легально". [16+]
4.00 "Модный приговор". Новогодний выпуск. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Начнём с утра!"
6.45 Т/с "Между нами девочками". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
21.00 Т/с "Другие". [12+]
1.20 Х/ф "Соседи". [12+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.45, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00, 1.15 Х/ф "Невеста на Рождество". [16+]**
**9.30 М/ф "Сказание о Сельме", "Пип и Альба. Рождественское приключение". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**12.00 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 "Ете егет". [12+]**
**16.15, 16.45 "Земляки". [12+]**
**16.30 "Ради добра". [6+]**
**17.00 "Полезные новости". [12+]**
**17.15 Детей много не бывает. [0+]**
**17.45, 23.00 Яны йыл-караоке. [12+]**
**19.00 "Курай даны". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00, 6.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.45 Фестиваль этнической музыки "Мусафир". [12+]**
**0.30 "Уфа. Живое". [12+]**
**2.45 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**4.15 Д/ф "Знакомые незнакомцы-3". [12+]**

## 4 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Старик Хоттабыч". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.35 Х/ф "Марья-искусница". [0+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.20 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.15 "Повтори!" [16+]
17.35 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.50 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.20, 22.20 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Старые песни о главном. [16+]
2.45 Лыжные гонки. Кубок мира-2019-2020. Тур де ски. Спринт. [0+]
3.30 Х/ф "Любовное гнездышко". [12+]

### РОССИЯ 1

4.50 "Начнём с утра!"
6.45 Т/с "Между нами девочками". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
21.00 Т/с "Другие". [12+]
1.20 Х/ф "Соседи. Новый сезон". [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.45, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00, 1.45 Х/ф "Замерзшие в любви". [16+]**
**9.30 М/ф "Сказание о Сельме", "Фиксики". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Камыр батыр". [0+]**
**12.00 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 "Ете егет". [12+]**
**16.15, 16.45 "Земляки". [12+]**
**16.30 "Ради добра". [6+]**
**17.00 "Полезные новости". [12+]**
**17.15 Детей много не бывает. [0+]**
**17.45, 23.30 Яны йыл-караоке. [12+]**
**19.00 "Беҙ Баймаҡтар бит әле". Концерт. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00, 6.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**22.30 Итоги года (на баш. яз.).**
**0.15 Фестиваль этнической музыки "Мусафир". [12+]**
**1.00 "Уфа. Живое". [12+]**
**3.15 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**5.30 Детей много не бывает. [6+]**

## 5 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Марья-искусница". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.30 Х/ф "Три орешка для Золушки". [0+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.20 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.15 Повтори! [16+]
17.20, 4.15 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.50 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.20, 22.20 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Старые песни о главном. Постскриптум. [16+]
2.10 Лыжные гонки. Кубок мира-2019-2020. Тур де ски. Мужчины. 9 км. Финал. Трансляция из Италии. [0+]
2.55 Х/ф "Мы не женаты". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Начнём с утра!"
6.45 Т/с "Между нами девочками". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
21.00 Т/с "Другие". [12+]
1.20 Х/ф "Соседи. Новый сезон". [12+]
4.53 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Х/ф "Двойной праздник". [16+]**
**9.30 М/ф "Сказание о Сельме", "Фиксики". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Волшебный хвостик". [0+]**
**12.00 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 "Ете егет". [12+]**
**16.15 "Земляки". [12+]**
**16.30 "Дорога к храму". [0+]**
**17.00 "Полезные новости". [12+]**
**17.15 Детей много не бывает. [0+]**
**17.45, 23.30 Яны йыл-караоке. [12+]**
**18.30 Лидеры региона. [12+]**
**19.00 Концерт заслуженного артиста РБ Рустама Гизатуллина. [12+]**
**21.00, 22.30 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**21.30 Итоги года (на рус.яз.).**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**0.15 Фестиваль этнической музыки "Мусафир". [12+]**
**1.00 "Уфа. Живое". [12+]**
**1.45 Х/ф "Двойной праздник". [12+]**
**3.15 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҠЫШ БАБАЙ НИСЕК АТАП ЙӨРӨТӨЛӘ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**51-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Асҡыс. Махорка. Машинист. Күләгә. Сирек. Агиш. Етәксе. Яуап. Ирназаров. Әтәс. Ауыл. Нард. Агиняй. Оран. Иртәк. Тәпе. Әмер. Атлас. Олон. Агай.

**Вертикаль буйынса:** Суфиянов. Миржанова. Кәрзин. Мари. Әсәнов. Нуар. Сохари. Диета. Ява. Тана. Тышау. Трал. Сәкән. Агза. Күреп. Лакмус. Әминә. Әбәк. Әрке. Сайыр.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 декабрь** 10.00, 12.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**2 ғинуар** 12.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**"Эскәмйә"** (А. Гельман), драма. 12+

**3 ғинуар** 11.00, 13.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**"Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 12+

**4 ғинуар** 11.00, 13.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**"Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+

**5 ғинуар** 11.00, 13.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**"Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 декабрь** 12.00, 15.00 **"Алые паруса"** (А. Решетникова, А. Грин повесы буйынса), романтик фантазия. 12+

**2 ғинуар** 10.00, 12.30, 15.00 **"Айболит и Бармалей"** Яңы йыл әкиәте. 0+

10.30, 13.00, 15.30 **"Новогодний переворот"** Яңы йыл әкиәте. 0+

**3 ғинуар** 10.00, 12.30 **"Айболит и Бармалей"** Яңы йыл әкиәте. 0+

10.30, 13.00, 15.30 **"Новогодний переворот"** Яңы йыл әкиәте. 0+

**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

**4 ғинуар** 10.00, 12.30 **"Щелкунчик"** (Нина Соболева, Э.Т.А. Гофман әкиәте буйынса), музыкаль әкиәт. 0+

**5 ғинуар** 10.00, 12.30 **"Щелкунчик"** (Нина Соболева, Э.Т.А. Гофман әкиәте буйынса), музыкаль әкиәт. 0+

12.00, 14.00 **"Сундучок Деда Мороза"** (Д. Голубецкий), Яңы йыл әкиәте. 0+

**"Акса булһа бер мукса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. 18.00 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 ғинуар** сәғәт 14.00, 16.00; **3, 5, 7 ғинуар** сәғәт 12.00, 14.00, 16.00; **4, 6 ғинуар** 12.00, 14.00 **"Путешествие в мир сказок"** Өфөнөң Яңы йыл утренниғы. 0+

**4 ғинуар "Яңы йыл менән!"** театрлаштырылған концерт. 18.00 6+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Декабрь - Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (4) дүшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 31 (5) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 1 (6) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 2 (7) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 3 (8) йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 4 (9) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 5 (10) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТАҒЫ ХАҠ АРТА

**Киләһе йылдың 1 ғинуарынан Өфөлә республиканың бер нисә районында сүп-сар сығарыуға хаҡтар үҙгәрә.**

Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты республиканың 1-се Төбәк операторының эшмәкәрлек зонаһында "Ҡаланы йыйыштырыу буйынса махсуслашҡан автомобиль хужалығы" муниципаль унитар предприятиеһы төбәк операторы хеҙмәттәренә берҙәм тарифтарҙы расланы. Тейешле документ Башҡортостан Республикаһының рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылып сыҡты. Хәҙер Өфө ҡалаһы, Архангел, Балаҡатай, Благовар, Благовещен, Дыуан, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Кушнаренко, Мәсетле, Нуриман, Салауат, Өфө һәм Шишмә райондары ингән 1-се зонала ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар сығарыуға халыҡ өсөн сикке тариф - 447,04 һум (бер кубометрға). Киләһе йылдың 1 ғинуарынан был сумма азыраҡ кәмей һәм бер кубометр өсөн 445,86 һум була. Ләкин 2020 йылдың йәйендә үк тариф 22,89 һумға арта. 1 июлдән ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш иткән өсөн бер кубометрҙың хаҡы 468,75 һумғаса күтәрелә.

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

**Хөрмәтле яҡташтар!**

**Һеҙҙе Яңы 2020 йыл тыуыуы айканлы ихлас күңелдән тәбрикләйем.** Үтеп барған йылда урындағы хакимиәттәр менән берлектә халыҡтың тормош кимәлен яҡшыртыуға булышлыҡ иткән байтаҡ проблемаларҙы хәл итеү мөмкин булды. Әммә эшләнәһе эштәр, хәл ителәһеләр бихисап әле. Ошондай берҙәмлек, яҡшыға ынтылыштар һөҙөмтәһендә Яңы йылда тағы ла юғарыраҡ уңыштарға өлгәшербеҙ тип ышанам.

Барығыҙға ла сәләмәтлек, бәхет, хыялдарығыҙҙың тормошҡа ашыуын теләйем. Яңы йыл һеҙҙең йөрәктәргә йылылыҡ һәм өмөттәр ҡундырһын айҙә!

**Хөрмәт менән, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф БАЙҒУСҠАРОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҮҘ КӨЙӨБӨҘҘӨ КӨЙЛӘЙЕК!

**Баш ҡала сәхнәләрендә үткән төрлө концерттарҙа башҡорт йырсыларының кимәлен һынап, тере тауышҡа йырларлыҡ артистарыбыҙ бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалып барыуын һәм моңдо алдан яҙҙырылған музыка алыштырыуын күреп өйрәнгән тамашасы өсөн "Башҡорт йыры-2019" көтөлмәгән бер бүләк булып сыҡты. Ниһайәт, ысын башҡорт йыры нисек яңғырарға һәм уны ысын башҡорт йырсыһы нисек башҡарырға тейешлеге раҫланды был тамашала.**

Туғыҙынсы миҙгеленә йомғаҡ яһаған конкурста сығыш яһаусылар тәүге тапҡыр Башҡортостандың Милли симфоник оркестры (генераль директоры Артур Нәзиуллин) оҙатыуында йырҙар башҡарҙы. Оркестр менән Мәскәүҙән саҡырылған ҡунаҡ, Рәсәй Дәүләт академия симфоник капеллаһы дирижеры Дмитрий Крюков етәкселек итте, ә йырҙы оркестрға һалыу эшен композитор Урал Мөхәмәтйәров атҡарып сыҡҡан. Был уникаль проекттың уңышлы һөҙөмтәһен тамашаһы залында алма төшөрлөк тә урын ҡалдырмаған йыр-моң һөйөүселәр юғары баһаланы. Тамашаның тәүге өлөшөндә башҡорт эстрадаһында оҙон көйҙәрҙе һәм классик йырҙарҙы башҡара алған күсле һәм моңло тауышлы йырсыларыбыҙ барлығы сағылыш тапһа, икенсеһендә башҡорт эстрадаһының сағыу йондоҙҙары һынау тотто. Йырсылар араһында йыл дауамында барған ярыш һөҙөмтәләре буйынса финалға сыҡҡан алты ҡатнашыусы араһында төп приз - Гран-при хужаһы табылмауға ҡарамаҫтан,




йәштәрҙең таланты барыбер сағыу балҡыны. Быйылғы конкурс һөҙөмтәләре буйынса I урынға Артур Шәрипов лайыҡ булды.

- Йыр сәнғәте көрсектә, мәҙәниәтте шаҡы-шоҡо баҫты, тип туҡтауһыҙ әрләүҙәргә яуап булды быйылғы "Башҡорт йыры". Моңло, талантлы, йырсы башҡорттоң мәңгелеген һәм бөйөклөгөн яңы һулышта күрҙек! Юҡһа, ысынлап та, элеккеләр генә шәп йырлаған да, уларға алмаш тыумаған, халыҡтың һәләте шунын менән бөткән, башҡалар яҡшы эшләй, беҙҙекеләр алға китә алмай, тигән кеүек фекерҙәр аңға һеңә башлағайны, - тип тәьҫораттары менән бүлеште тамашаһы Светлана Насырова. - Быйылғы "Башҡорт йыры"нда артистар мәшһүр йырсылар быуыны дауам итеүен, башҡорт йырының тиңһеҙлеген, башҡаларҙан бер башҡа юғары булыуын иҫбатланы. Киң диапазон, көслө тауыш менән яңғыратып йырлау булһынмы, йөрәк һалып талғын ғына башҡарыумы - барыһы ла беҙҙең тәбиғи һәләт. Башҡорт халыҡ йырҙарының үҙенсәлеге лә тап шунда бит: борма-борма боролоштар, йөрәктән һыҙып йырлау, тәрән һулыш, киң алымдар менән алдырыу. Милли симфоник оркестрға ҡушылып йырлаған артистарҙы халыҡ тын да алмай, һушы китеп тыңланы. Концерттың күберәк талғын һәм классик йырҙарҙан торған тәүге өлөшө тамсы ла ялҡытманы, низер уйларлыҡ та әмәл ҡалдырманы. Яңылыҡ был. Йыр сәнғәтендәге матур боролош. Бындай рухи азыҡтың "тәмен" ашаған татыһа ла, тураған ныҡыраҡ белә. Ойоштороусыларға, милли сәнғәтте күтәреү хаҡына тырышыусыларға халҡыбыҙ исеменән рәхмәт белдерәйек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Һәр яҡлап бер көнлөк ҡиммәттәр менән йәшәргә өгөтләп, халыҡтарҙы асылдарынан яҙҙырған заманда "Башҡорт йыры" кеүек үҙ моңобоҙҙо сағылдырырлыҡ конкурсыбыҙ булыуы ҡыуандыра. Ошо сара арҙамында башҡорт халыҡ йырҙарында сағылған булмышыбыҙ, тарихыбыҙ, күңел түребеҙҙәге хистәребеҙ хәтеребеҙҙә яңыртылып тороуы ла киләсәгебеҙ өсөн мөһим. Әйҙәгеҙ, был кәрәклекте тойоп, йырсыларҙың һәм музыканттарҙың ижадын хөрмәт иткән һәм талантларын танығн, тамашасыларының мәҙәни үҫешенә битараф булмаған "Башҡорт йыры" кеүек сараларҙы хуплайыҡ һәм үҙ көйөбөҙҙө көйләп йәшәйек!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АФАРИН!

# ЕГЕТТӘРСӘ...

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "Егеттәр балы" телевизион проектының финалы уҙҙы. Проектта ҡатнашыусыларҙың һәр береһе республика шифахаҙаларынан, бағыусыларҙан һәм шәхси эшҡыуарҙарҙан иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ булды. Төп бүләк - башҡорт тоҡомло ат Әбйәлил районынан Салауат Хафизовҡа тапшырылды.**

Реалити-шоу жанрындағы "Ете егет" телепроекты Башҡортостан юлдаш телевидениеһында күрһәтелде. Ете егет үҙҙәренең төрлө кәсептәрҙә оҫталығын һынап ҡараны һәм үҙ-ара ярышты. Телетамашасылар интерактив тауыш биреү юлы менән улар араһынан иң лайыҡлыһын һайлап алды. Проекты ойоштороусылар әйтеүенсә, шоуҙың төп маҡсатына өлгәшелгән: хәҙер һәр ҡатнашыусы тимер сүкеүҙең, солоҡсолоҡтоң, ағас һырлауҙың нимә икәнен, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр белеү фарызлығын һәм был оҫталыҡҡа өлгәштерер сифаттарҙы нисек тәрбиәләргә кәрәклеген белә.

"Ете егет" проектының төп бағыусыһы Баймаҡ районынан Венер Ирназаров һәм еңеүсегә атты ул бирҙе. Ул йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә, башҡорт тоҡомло аттарҙы бик яҡшы белә һәм ярата", - ти проект етәксеһе Рита Өмөтбаева һәм уға ла, башҡа бағыусыларға ла рәхмәт һүҙҙәрен юллай. Билдәләнеүенсә, "Егеттәр балы" тапшырыуын 31 декабрҙә киске сәғәт 9-ҙа Башҡортостан юлдаш телеканалында ҡарарға мөмкин.



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҢЕЛЕҢ БУШ БУЛМАҺЫН...

## Алла инмәй ҡуйыр

Ямғырҙа ат һайлама, байрамда ҡыҙ һайлама.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Буш башҡа барыһы ла инә, буш баштан тағы ла күберәк сыға.

**(Владислав Гжегорчик).**

Юғарыға менеп барғанда осраған кешеләргә иғтибарлыраҡ бул, һин улар менән түбәнгә төшөп барғанда осрашасаҡһың әле.

**(Уилсон Мизнер).**

Айырым кешеләрҙең ямһанлығын гонаһ тип атайҙар. Тотош халыҡтың ямһанлығын милли характер тиҙәр.

**(Вернер Мич).**

Күңелең буш булғанда, унда Алла инмәйәсәк.

**(Анри де Монтерлан).**

Бәхет, яҙ һымаҡ, һәр осраҡта үҙ йөҙөн үҙгәртә...

**(Андре Моруа).**

Йоҙроҡтар төйнәлгәндә асыҡ фекерләү мөмкин түгел.

**(Джордж Нейтан).**

Насар яҡшы шағир булғансы, бөйөк насар шағир булыу һәйбәтерәк.

**(Огден Нэш).**

Эскеселәр артынан да, сәйәсмәндәр артынан да беҙгә йыйыштырырға тура килә...

**(Остин О'Малли).**

Кемгә көнләшеп ҡарайҙар, шуны күрә алмайҙар.

**(Генри Менкен).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Хоҙай ике осраҡта йылмая икән. Бына врач ауырыу баланың әсәһенә: "Ҡайғырмағыҙ, мин һеҙҙең улығыҙҙы мотлаҡ дауалаясаҡмын", - ти. Ошоно ишетеп, Алла: "Мин был әсәнең улын үҙемә алырға йыйынам, ә врач уның тәнен дауаламаҡсы", - тип уйлап һәм йылмайып ҡуя. Врач сирле менән булған хәлдең хужаһы итеп тоя үҙен, ә ысын хужа - ул Хоҙай икәнен иҫенә лә алмай.**

**Икенсе тапҡыр Алла ике егеттең үҙ-ара ер бүлешкәнен ҡарап тора. "Был ер - минеке, ә теге өлөшө - һинеке", - ти егеттәрҙең береһе. Алла йылмая һәм былай тип уйлай: "Бар Ер йөҙө минеке генә булғанда, был әҙәм балалары үҙҙәрен ошо ергә хужа тип уйлай".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3707
Заказ - 2607/12